ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 март (буранай) 2015

№ 12 (638)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уҡытыусы ниндәй - уҡыусыһы шундай,**

йәки Берҙәм дәүләт имтиханы балалар өсөн генәме?



3

**Ә беҙҙең ағинәйҙәр...**

саңғыла елдерә!



6

**Мөфтөй Мөхәмәтйәр Солтанов**



7

**Атай ҡулында - ҡамсы,**

әсәйҙекендә - перәник...



8-9

**ТВ-программа** 14

***Үҙегеҙҙә оптимислыҡ, позитивлыҡ кеүек сифаттарҙы нығытығыҙ. Әгәр ҙә тормошта һәм эшегеҙҙә кире һөҙөмтәләр, насар хәбәрҙәр генә көтһәгеҙ - улар киләсәк. Үҙеңде негативҡа көйләү - ул донъяға бысраҡ, ҡыйыш-мыйыш күрһәтеүсе күҙлек аша бағыу ул. Негатив икәнһегеҙ, тимәк, һеҙ кешеләрҙең дә, тормоштоң да бары тик кире яҡтарын ғына күрәһегеҙ, ә ыңғай күренештәр, матур сифаттар шәйләнмәйәсәк. Негативлыҡ - ул булмағанды күреү, ә был ҡот осҡос! Шуға ла, тормоштан яҡшыны эҙләгеҙ, яҡшыны күрергә тырышығыҙ - уларҙы мотлаҡ табасаҡһығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ошо араларҙа һеҙҙе ниндәй ваҡиғалар шатландырҙы?

***Айрат АЙТУҒАНОВ, йәш эшҡыуар:*** Минең уйымса, бындай һорауҙы бирергә күптән ваҡыт тыуғандыр, юғиһә, киң мәғлүмәт сараларынан да, үҙебеҙҙе уратып алған мөхит сиктәрендә лә күберәк кире, күңелһеҙ хәлдәр хаҡында йыш ишетергә тура килә. Телевизорҙы ҡасан асып ҡарама - көнө-төнө шул Украина, енәйәт, урлашыу йә ришүәт тураһындағы хәбәрҙәр. Бындай кире мәғлүмәттәрҙән йонсоп та кителә. Өлкәнерәк быуын кешеләре менән аралашҡанда ла бер үк тема: улар йә тормоштан ризаһыҙлыҡ белдерә, йә сәйәсәтте, депутаттарҙы әрләй. Ахыр сиктә, йәштәрҙе булһа ла тәнҡитләргә тотоналар: йәнәһе лә, виртуаль донъяла йәшәйҙәр, үҙаллылыҡ тигән нәмә юҡ, туған телде, тарихты белмәйҙәр һ.б. Бындай ғәйепләүҙәр менән һис тә ризалашҡы килмәй, сөнки тормошто "ҡара күҙлектән" күреп өйрәнгән кешеләр генә шулай тип әйтә, уларҙың ҡайһылары бөгөн әйләнә-тирәлә булып ятҡан яҡшы нәмәләрҙе күрмәй ҙә, белергә лә теләмәй. Ә бит шул уҡ ваҡытта эргәбеҙҙә генә бынамын тигән матур эштәре, һоҡланғыс проекттары менән таң ҡалдырыусы ижади йәштәребеҙ бик күп! Башынды күтәреп, саҡ ҡына көнкүреш ваҡлыҡтарынан арыныу һәм гәзит уҡып алыу ҙа етә: ана бит, ниндәй шәп егеттәр хаҡында яҙып тора "Киске Өфө", Йәшлек", "Башҡортостан" гәзиттәре. Мин, мәҫәлән, милләтебеҙ ғорурлығы булып өлгөргән талантлы йәш режиссер Айнур Асҡаров, Америкала еңеүҙәр яулап, башҡорт данын донъяға таратыусы боксер, өҫтәүенә, китап яҙыусы Хәбир Сөләймәнов, Рәсәйҙең иң көслө кешеһе булараҡ танылған Эльбрус Ниғмәтуллиндың өряны уңыштары хаҡында әлеге гәзиттәрҙең һуңғы осорҙағы һандарынан уҡып белдем һәм күңелем үҫеп, ҡыуанып киттем: бына егеттәр, исмаһам! Берәүҙәр хәбәр һөйләп, өгөт-нәсихәт менән мауыҡҡанда, икенселәр өндәшмәй генә уйниәттәрен атҡарып та ҡуя. Туған тел һәм тарихыбыҙға ҡарата мөнәсәбәттәрен дә ғәйепләй алмаҫ инем үҙем белгән һәм аралашып йәшәгән йәштәштәремдең. Әйткәндәй, Айнур Асҡаровтың боронғо башҡорт эпосына нигеҙләнеп төшөргән "Әсә" фильмы тап ошо һүҙҙәремә ҡеүәт булып тора ла инде. Режиссер милли идеяның ғына түгел, бәлки, тотош кешелек зиһененең фәҡәт халыҡ аҡылына нигеҙләнеп үҫешеүен бик яҡшы аңлай. Зыялы йәштәребеҙҙең уғата туған тел, иман һәм боронғолоҡ хазиналарына йәбешеп ятыуын тойомлағандай булам мин һуңғы осорҙа. Интернетты асып, милләттәштәребеҙ аралашҡан "Бәйләнештә"сайтынан сығып та фекер йөрөтөргә мөмкин: илһөйәрҙәребеҙ ҙә, телһөйәрҙәребеҙ ҙә күп, шөкөр. Кәрәк икән, хатта шиғри телгә лә күсеп китә ала улар - кинәйәле таҡмаҡтары хайран үә ғибрәт итерлек. Элек беҙ түшенә сит ил кумирҙарының портреттары һәм аңлашылмаған һүҙҙәр яҙылған майкалар кейеп йөрөһәк,"БашАрт" фирмаһы беҙгә хәҙер милли символикалы, башҡортса яҙылған футболкалар, теүәтәйҙәр, хатта алъяпҡыстар сығара башланы. Был да үҙенә күрә бик кәрәк шөғөл.

Ошо көндәрҙә генә мине тулҡынландырған ҡыуаныслы ваҡиғаларҙың береһе тағы ла шул булды: Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнап, Баймаҡтан бер төркөм ир-азаматтарының саңғыла баш ҡалабыҙға марафон ҡыуып килеп етеүе. Илһөйәрлек өлгөһөнөң тап үҙе бит был! Икенсе яҡтан, спорт һәм сәләмәт тормош өлгөһө лә. Эргәбеҙҙә күп итеп хәбәр һөйләмәй генә, ана шундай матур эштәре менән башҡаларға ҡыуаныс таратып йәшәгән кешеләрҙең булыуы, һис шикһеҙ, шатлыҡлы күренеш. Ана шундай матур башланғыстары менән милләттәштәрен ҡыуандырып йәшәүселәр күберәк булһын ине, тип теләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ӨФӨ БАЛАЛАРЫ ЛА...

## әсе көлә белә




11-се биттә уҡығыҙ.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәнәлдәргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛҠЫҢ ӨСӨН УЛ ҮҪТЕР!

**Ишморат МАЛИКОВ, Федоровка районы Яңы Яуыш ауылы мәктәбе директоры:** Барлыҡ эшләгән эштәребеҙ, йәшәү маҡсатыбыҙ - йәштәр өсөн. Шуға күрә, үҫеп килгән быуынға, аҡыллы булыбыҙ, тип мөрәжәғәт итәм. Заман шарттарына буйһоноп, бөтәһе артынан эйәрергә ашыҡмағыҙ, үҙ аҡылығыҙ менән йәшәгеҙ, тим. Сөнки бөгөн донъяла йәштәрҙе тура юлдан яҙҙырыу өсөн махсус рәүештә әллә күпме ысулдар уйлап сығарып ҡына торалар. Беләһегеҙ, Башҡортостанда ғына түгел, бөтөн Рәсәй буйынса йәштәрҙең спайс ҡулланыуына бәйле фажиғәләр булды. Ошондай уйланмаған, ахмаҡ аҙымға бармағыҙ, төрлө ауырлыҡтарға ҡарамайынса, тормошта үҙ урынығыҙҙы табырға тырышығыҙ, тим балаларға.

Әйтергә кәрәк, аҡыллы йәштәребеҙ байтаҡ, ауыл ерендә лә гөрләтеп донъя көтөп йәшәүселәр бар. Ниндәй генә мәсьәлә килеп тыуғанда ла, ниндәй генә ауырлыҡтан да сығыу юлдары булыуын аңларға, төшөнкөлөккә бирелмәскә кәрәк. Иң мөһиме, милләттәштәрҙең һәр береһе тик үҙ өйөн, үҙ донъяһын ҡайғыртып ҡына ятмаһын, битарафлыҡтан арынһын ине. Ил, ер, тел мәсьәләләре хәл ителгән ваҡытта дөйөм эшкә һәр берегеҙ үҙ өлөшөбөҙҙө индереп ҡалайыҡ. Һәр бер башҡорт үҙенә: "Башҡорт халҡы өсөн нимә эшләнем, нимә эшләргә тейешмен һәм эшләй алам?" - тигән һорауҙы биреп ҡараһа, яҡшы булыр ине.

Әлеге көндә шулай уйлана белгән милләттәштәр ауылдаштарын әүҙем рәүештә "Айыҡ ауыл" кеүек конкурстарҙа ҡатнашырға дәртләндерә, икенсе күп төрлө конкурстар ярҙамында халыҡты күтәрмәләргә тырыша. Милләт-ара ығы-зығы тыуҙырмай ғына, балаларыбыҙҙың күңелендә үҙ милләтенә ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ хисе тәрбиәләйек. Бала башҡорт милләтенән булыуынан оялмаһын, халҡының тиндәр араһында тиң булыуын белеп үҫһен. Тағы ла шул: йәштәребеҙ киң таралған ҡараштарҙың береһенә, йәғни булаҫаҡ кәләш ефете ниндәй милләт кешеһе булыуына ҡарамаҫтан, үҙе яҡшы шәхес булһын, тигән фекергә эйәрмәһен ине. Ҡыҙҙарыбыҙ Таня-Таңһылыу яҙмышына дусар булмаҫ өсөн башҡорт егеттәренә кейәүгә сыҡһын, балаларын башҡорт рухлы итеп үҫтерһен. Быныҡ бер гәйебе лә юҡ, һәр кем үҙ милләтенә балалар үҫтерһен тигән аҡыл - Хоҙай ҡушҡан фәмәл.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ошо араларҙа һеҙҙе ниндәй ваҡиғалар шатландырҙы?

(Башы 1-се биттә).

***Гөлшат ЮНЫСОВА, БДУ-ның Сибай институты студенты:*** Бынан бер-ике аҙна элек кенә Өфөләге "ВДНХ-ЭКСПО"комплексында булып үткән халыҡ кәсептәре оҫталарының Бөтә Рәсәй күргәҙмәһендә ҡатнашып ҡайтыуым менең өсөн бик ҡыуаныслы ваҡиға булды. Унда мин танылған сәсәниә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Асия Ғәйнуллина етәкселегендәге Сибай "Агинәйҙәр ҡоро" ағзалары, шулай уҡ ошо ойошма янында эшләүсе "Ете ҡыҙ" һылыуҡайҙар студияһында шөғөлләнеүсе әхирәттәрем менән барғайным. Беҙ унда хөрмәтле ағинәйҙәр ярҙамында ижад иткән ҡул эштәребеҙҙе күрһәттек, концерт программабыҙ менән сығыш яһаныҡ - ҡыҫҡаһы, үҙебеҙҙе күрһәттек, башҡаларҙы ҡараныҡ. Ынйы-мәрйендәрҙән, аҫыл таштарҙан һәм төңкәләрҙән яһалған ҡашмауҙарҙы, түшелдеректәрҙе, кейеҙҙән баҫып эшләнгән ултырғыс түшәктәрен һәм башҡа төрлө ҡаралдыны, сигеү өлгөләре һәм селтәрҙәрҙе, урын ябыуҙарын күргәҙмәгә ҡуйҙыҡ. Күргәҙмәнең ойоштороу комитеты һәм хөкүмәт ағзалары беҙҙең янға туҡталғас, ҡунаҡтарҙы үҙебеҙ эшләп килтергән тәмле буҙа һәм сәксәк менән ҡаршыланыҡ. Беҙҙең ҡул эштәре комиссия ағзаларына бик оҡшаны: ҡашмауҙы эшләү техникаһы, биҙәүестәре менән ҡыҙыҡһындылар, ә хәситәләребеҙҙе хатта кейеп-самалап ҡараусылар ҙа булды. Күргәҙмә комплексының ялан шикелле иркен залында алма төшөр ҙә урын булманы: Башҡортостандан ғына түгел, барлыҡ илдең төрлө мөйөштәренән ҡул эштәре оҫталары йыйылғайны бында. Ошонда уҡ йөн, дебет иләп, шәл бәйләп ултыра оҫтабикәләр, ә хәйбуллаларҙың станокта - шәл, ғафуриҙарҙың балаҫ һуғыуҙарын хайран ҡалып тамаша ҡылды бар халыҡ. Киләсәктә халыҡ кәсептәренә кинерәк юл асыу һәм тейешле шарттар булдырыу, ошо йүнәлештәге эшҡыуарлыҡты хуплау, уға аяҡ салыу түгел, киреһенсә, һәр яҡлап булышлыҡ итеү бурысы ҡуйыла икән, быға ҡыуанырға һәм күңелең яҡтан, ҡулың белгән эш менән тағы ла илһамланыбыраҡ шөғөлләнергә генә ҡала.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, педагог-ветеран, Мәләүез ҡалаһы:*** Тормош ҡәҙерен аңлаған иҫән-һау кешегә - һәр көнөң ҡыуаныс инде ул. Бына бөгөн салт аяҙ, ҡояш көлә, күк йөҙө зәп-зәңгәр - шул үҙе ҙур шатлыҡ түгелме? Офоҡта болоттар ҡуйырғандай бит, юғиһә. Донъялар тыныс була күрһен берүк!

Ҙур шатлығым менән уртаҡлашмаҡсымын: ошо көндәрҙә Ырымбурҙағы "Хөсәиниә" мәҙрәсәһенә ситтән тороп уҡырға индем! Мәләүез мәсете янында үткәрелгән дәрестәр курсын тамамланым тамамлауға, ләкин был өлкәлә белемде артабан камиллаштырыу теләге тынғы бирмәне, шунлыҡтан юлландым да инде боронғо данлы мәҙрәсәбеҙгә. Быныһы бер шатлыҡ булһа, шунда уҡып йөрөгән бихисап егет-ҡыҙҙарҙы күреп, тағы бер оло ҡыуаныс кисерҙем. Әйткәндәй, үҙебеҙҙең Мәләүез мәсетендә лә йәштәр байтаҡ. Уларҙың ата-әсәләре "динһеҙ" заманға тура килеп, балаларына иман нурын ҡан аша ла, рух аша ла бирә алманы, уның ҡарауы, йәштәр хәҙер дингә үҙҙәре теләп килә, күңел ихтыяжы кисереп, аңлы рәүештә юл яра - шуныһы ҡыуандыра. Улар хатта беҙҙе, өлкәндәрҙе өйрәтә. Мәҫәлән, мәсетебеҙҙә Тимур исемле Көйөргәҙе егете бар. Дәрестәрҙә аңламаған ҡайһы бер нәмәләрҙе унан һораһаң, эргәһенә ултыртып, матур итеп аңлатып бирә, рәхмәт яуғыры. Тағы бер егетебеҙ мәсеткә әсәһен йөрөтә башланы. Уныһы әсеүенән туҡтап, улынан күрмәксе иманға килде. Хәҙер улы уҡыуын дауам итергә теләй, ләкин әсәһен иманлы, изге күңелле берәй ҡартҡа кейәүгә биреп, тормошон яйламайынса, ситкә сығып китә алмайыраҡ тора. Вәлит ауылынан тағы бер егет шулай уҡ әсәһен иманға дүндереп, "ҡырын юлдан" ҡурсып алып ҡалды. Мосолман күлдәге кейҙереп, аулыҡ ябындырып, матур итеп мәсеткә йөрөтә - танырлыҡ та түгел хәҙер ул ҡатынды. Шундай улдарҙы күреп, нисек шатланмайһың! Йәштәр мәсеттә никах уҡыта, сабыйҙарына исем ҡыҫҡырта. Әле бына күптән түгел ҡәйнешем айыҡ туй яһап, ҡыҙын кейәүгә бирҙе - йәштәрҙең тормоштарын Аллаһы Тәғәлә фатихаһында башлап ебәреүҙәре лә бик ҡыуаныслы бит ул. Бөгөнгө йәшәйеш һәм мөхитебеҙ ниндәй генә булмаһын, тормошобоҙҙо изгегә, яҡшыға көйләп, уны беҙ үҙебеҙ тағы ла яҡшыраҡ һәм яҡтыраҡ итә алабыҙ. Күп нәмә үҙебеҙгә бәйле.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Ташламалы хаҡ 513 һум 72 тин тәшкил итә. Апрелдә хаҡтарҙың артыу ихтималлығын күҙҙә тотоп, гәзитебеҙгә әле уҡ яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ.**

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 402 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға 252 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 252 һум.

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн онлайн яҙылыу " һылтанмаһы аша vipishi.ru сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Мартта гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер Рәшит Назаровтың **"Ер һәм йыһан йыры"** йыйынтығын, Шәүрә Шәкүрованың **"Өфө вокзалы"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эшләүсе координация кәңәшмәһе ултырышын уҙғарҙы. Ул алкоголь продукцияһының законһыҙ әйләнешенә ҡаршы эш итеү мәсьәләләренә арналды. Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, республикала спиртлы эсемлектәр һатыу кәмегән, был халыҡтың уны аҙ ҡуллана башлауы хаҡында һөйләй кеүек. Ысынында иһә, легаль алкоголь продукцияһын арзан суррогат ҡыҫырыҡлап сығара. Башҡортостан Башлығы бөтә власть органдарына, хоҡуҡ һаҡлау һәм контроль-күҙәтеү структураларына ошо мәсьәлә менән етди шөғөлләнергә ваҡыт етте, тип билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Финанс министрлығы коллегияһында ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Республика Башлығы хәбәр итеүенсә, былтыр Башҡортостан биләмәһендә Рәсәй бюджетына 560 миллиард һумдан ашыу килем йыйылған, был 2013 йылдағы һөҙөмтәләрҙән 10,5 процентҡа юғары. Шул уҡ ваҡытта республиканың тупланма бюджетына 133 миллиард һум табыш инген, был, 2013 йыл менән сағыштырғанда, 5,3 процентҡа ғына күберәк. Быйыл республика бюджеты 97,6 миллиард һум суммаһында раҫланған.

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов күп балалы әсәләргә "Әсәлек даны" миҙалы тапшырҙы. "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылда булдырылды, шул ваҡыттан алып ул 6704 ҡатын-ҡыҙға тапшырылды. Былтыр 447 әсә ошо наградаға лайыҡ булды. Был юлы Өфөгә республиканың төрлө мөйөштәренән 50 ҡатын-ҡыҙға миҙал тапшырылды. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда балалы ғаиләләргә социаль ярҙам сараларының 30-ға яҡын төрө күрһәтелә. Йыл һайын ошо маҡсатҡа федераль һәм республика бюджеттарынан 8 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә.

✓"Әсәлек даны" миҙалы тапшырылған сарала билдәләнеүенсә, республикала торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж биш һәм унан күберәк балалары булған ғаиләләргә торлаҡ сертификаттары бирелә. 200-ҙән ашыу күп балалы ғаилә ошо хоҡуҡ менән файҙаланды, шул иҫәптән 2014 йылда 40 ғаилә 130 миллион һумлыҡ сертификаттар алды. Торлаҡ сертификаты буйынса социаль түләүҙәрҙең уртаса күләме бер ғаиләгә 3 миллион һумдан ашыу тәшкил итте.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# УҠЫТЫУСЫ НИНДӘЙ - УҠЫУСЫҺЫ ШУНДАЙ,

## йәки Берҙәм дәүләт имтиханы балалар өсөн генәме?

**Берҙәм дәүләт имтихандарына ярайһы уҡ өйрәнеп, күнегеп тә алдыҡ кеүек, ләкин йыл һайын ошо мәл яҡынайған һайын, борсолоу-хәүеф тулҡындары ҡабаттан ҡалҡып сыға. Уны тыныс күңел менән ҡаршылап, имен-аман үткәреп ебәреү өсөн балаларҙың төплө белемгә эйә булыуына ныҡлы ышаныс кәрәк - бары шул ғына.**

Ләкин ошо "шул ғына" тигән нәмә бик күп факторҙарҙы үҙ эсенә ала. Баланың дөйөм әҙерлек кимәле, тырышлығынан ҡала, иң мөһиме - мәктәптәрҙә уҡытыу сифаты. Ә был инде уҡытыусыларҙың үҙҙәренең дөйөм кимәле, һөнәри оҫталығы һәм уҡытҡан предметы буйынса төплө белеменә туранан-тура бәйле. Ошо тәңгәлдә гел генә ҡыҙымдың математика уҡытыусыһы Гүзәл Фриль ҡыҙы Хәлиуллинаны рәхмәт һәм дә ихтирам тойғоһо менән иҫкә алам. Бәхетебеҙгә күрә, уны тап сығарылыш йылында класыбыҙға етәксе итеп тәғәйенләнеләр. Ул килгәнсе был класс тәртипһеҙлек, дәрес ҡалдырыуҙар, "икеле"гә һөйрәлеүселәр буйынса "беренсе" килә ине. Бер-ике ай ҙа үтмәне: беҙҙең класты алмаштырып ҡуйҙылармы ни! Тәртип тә, өлгәш тә күҙгә күренеп яҡшыға табан китте. Математиканы өнәп бөтөрмәгән балалар был дәрескә дәртләнеп йөрөй башланы. Был сығарылышҡа БДИ-ны закон нигеҙендә беренселәр булып тапшырыу "бәхете" тәтегәйне. Балаларҙа ла, ата-әсәләрҙә лә ҡурҡыу-хәүеф тойғоһо шуға ла бик көслө ине. Гүзәл Фриль ҡыҙы, һис арттырыу түгел, көнө-төнө балалар менән булды, ҡабат-ҡабат тест һәм контроль эштәр үткәрҙе. Иң мөһиме: педагог балаларҙа үҙ-үҙҙәренә ышаныс тойғоһо тыуҙыра алды. Ҡыҙымдың да иң ҡурҡҡан ошо фәндән БДИ-ла яҡшы һөҙөмтә күрһәтеүе, әлбиттә, фәҡәт уҡытыусыһының оҫталығы хаҡында һөйләй ине. Класс етәксеһе булараҡ та был уҡытыусының ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тырым-тырағай балаларҙы татыу бер көс, коллектив итеп туплай алыуы, уның тәрбиәүи мәсьәләгә новаторлыҡ йәһәтенән ҡарауы хәл иткес әһәмиәткә эйә булды, тип уйлайым. Ялҡытҡыс бер төрләлек, стандарт фекерләүҙәр ят булды Гүзәл Фриль ҡыҙының эш алымдарына. Ул ойоштороған сараларҙа ҡатнашырға балалар үҙҙәре атлығып торҙо, сөнки нимәгә генә тотонмаһын - улар яңыса, ҡыҙыҡлы, уйландырырлыҡ, иҫтә ҡалырлыҡ ине. Был иһә педагогтың үҙенең донъяға киң ҡарашы, белеме, юғары мәҙәнилегенә бәйле булды.

Бер башлағас, тағын бер ихтирамлы педагог - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлсәсәк Әхәт ҡыҙы Ғәзизуллина хаҡында ла телгә алып китмәй булмай. Баш ҡалабыҙҙың М.Исҡужин исемендәге 136-сы лицейы башҡорт мәктәбе иҫәпләнһә лә, унда телде белмәгән балалар ҙа уҡырға килә һәм, башҡорт мәктәбендә тәртип һәйбәт, тип хатта ҡайһы бер урыҫтар ҙа балаларын ошо мәктәпкә бирә. Ә башҡорт теле дәрестәре - бөтә уҡыусылар өсөн мотлаҡ. Улар беҙҙең телде нисегерәк үҙләштерә һуң, тип ҡыҙыҡһыныуыма, ҡыҙым: "Әсәй, Гөлсәсәк Әхәт ҡыҙының дәрестәрендә иң тәртипһеҙ малайҙар ҙа шып-шым ғына ултыра, башҡортса һөйләшергә лә, яҙырға ла өйрәнделәр", - тип ғәжәп итә ине. Класта башҡорт яҙыусылары әҫәрҙәрен сәхнәләштереп уйнағанда, әлеге "тәртипһеҙ" малайҙарҙың да ролдәрҙе нисек итеп кемуҙарҙан талашып алып бөтөрүҙәрен көлөп тә, ҡыуанып та һөйләгәне хәтерҙә.

Ҡыҫҡаһы, уҡытыусы ниндәй - уҡыусыһы шундай, тигән фекерҙе анығ миҫалдар аша еткерергә теләүем аңлашылғандыр. Үкенескә күрә, бөтөн уҡытыусылар ҙа былдай кимәлгә тиңләшә алмай шул. Баш ҡалабыҙҙа көслө педагогтар байтаҡ, быныһы шик тыуҙырмай, тик уларға тиңләшеүселәр ҙә күберәк булһын ине. Ауыл мәктәптәрендәге хәлдә лә



маҡтанырлыҡ, тип әйтеп булмайҙыр, моғайын. Әйткәндәй, БДИ һөҙөмтәләре теге йәки был уҡытыусының эш сифатын күрһәтеүсе барометрға әүерелде лә ҡуйҙы - ниндәй шәп! Имтихан һөҙөмтәләренән кемдең ниндәй уҡытыусы булыуы һуҙһеҙ ҙә яҡшы аңлашылып тора хәҙер. Әйткәндәй, юғары даирәләрҙә лә быны аңлай башланылар шикелле. Яңыраҡ үҙәк гәзиттәрҙең береһендә Дағстан уҡытыусылары өсөн БДИ үткәрелеүе хаҡында хәбәр баҫылып сыҡты. Был аңлашыла ла: 2011 йылғы тәүге БДИ һөҙөмтәләре буйынса был республика иң артта ҡалғандар рәтендә ине. Тураһын ғына әйткәндә, балдар өҫтәп яҙыу, республиканың мәғариф өлкәһендәге башҡа төрлө коррупция факттары хаҡында күп яҙылды ул саҡ. Һөҙөмтәләр шуны асыҡлай: Дағстан уҡытыусыларының белем "багажы" ни бары уртаса уҡып йөрөгән балалар кимәлемә тап килә...

Был тәжрибәне башҡа төбәктәрҙә лә күтәреп алмаҫсылар. Ҡыҙыҡ, Башҡортостан уҡытыусылары ниндәй һөҙөмтә күрһәтер ине икән? БР хөкүмәте вице-премьеры Салауат Сәғитов белдереүенсә, беҙҙә лә педагогтарҙы уҡытыуҙың яңы технологияларын үҙләштереү, үҙ белемдәрен камиллаштырыу буйынса кимәлдәрен тикшереү бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине. Ваҡыты-ваҡыты менән булһа ла уҡытыусыларҙың белем кимәленә, һөнәри оҫталыҡ тәжрибәләренә мониторинг үткәреп тороу бик кәрәк. Дөйөм белем биреү мәктәптәрендә һәм бигерәк тә рус кластарында башҡорт теле уҡытыуҙың "тармар" килеү сәбәптәренең береһе тап ана шул уҡытыусы кимәленең тейешле талаптарға тап килмәүендә булды ла инде. Мәҫәлән, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон нигеҙендә дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыу кәрәклеге килеп тыуғас, хәтерләйһегеҙҙер, Өфөлә, башҡа ҡалаларҙа ҡайҙарҙан кемдәр генә йәлеп ителмәне был эшкә! Ауылдан килгән эшһеҙ уҡытыусылар ҙа, китапханасылар ҙа, яңы ғына вуз бөтөргән "йәпйәшел"дәр ҙә бар ине улар араһында. Оҫраҡлы кешеләр, тиһәң дә була ине ҡайһыларын. Донъя күргән кеше була тороп, башҡорт-рус телдәре уҡытыусыһы дипломына эйә булып та мин, мәҫәлән, ғүмерем буйы мәктәпкә уҡыта барырға ҡурҡтым: белемем һайҙыр тойолдо балалар уҡытырға. Ә әлеге "всеобщий набор"ға эләккән кешеләр уйлап та, тартынып та тормайынса, мәктәпкә килде: һи, башҡорт теле нимә инде, уҡытабыҙ беҙ уны, йәнәһе! Бының өсөн башҡорт телендә һөйләшә белеү генә етмәгәнлеген иҫәпкә алманы ҡайһылары. Ә бит төрлө методик алымдар менән бер рәттән, рус телен дә яҡшы белеү кәрәк ине өҫтәүенә.

Бер шулай автобуста ике үҫмерҙең рус телендә яҡшылап һөйләшә белмәгән башҡорт теле уҡытыусыһынан мыҫҡыллап көлөп, үҙ-ара гәпләшеп килеүенә шаһит булыуымды тетрәнмәй иҫләй алмайым. Ә улар наҙан уҡытыусынан ғына түгел, башҡорт теленән дә көлә ине бит! Ҡала ерендә эшле булыу, аҡса алыу маҡсатын ғына күҙҙә тотоп, ҙурыраҡ, бөйөгөрәк миссияны уйлап та бирмәгән әлеге "десант" ҡорбандары булды инде ул балалар. Уларҙы әрләп тә, ғәйепләп тә булмай. Туған телебеҙҙең бер телдән дә кәм түгеллеген танытып, уның байлығын, гүзәллеген башҡаларға күрһәтә алмаған әлеге әҙерлекһеҙ уҡытыусылар йоғаттарынан килеп сыҡты ла инде ҡала мәктәптәрендәге бунт - башҡорт телен һанламау, уны өйрәнеүҙән баш тартыу кампанияһы. Оҫта, тәжрибәле уҡытыусы балаларҙы иң тәүҙә үҙ шәхесе, белеме, үҙ-үҙен тотошо, мәҙәнилеге, хатта кейеме менән дә йәлеп итергә, ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырға тейеш ине. Бына кемдәрҙән кәрәк булған да бит БДИ тапшыртып, махсус конкурс буйынса һайлап алыу. Тик әлеге лә баяғы, һәр ваҡыттағыса, ашыҡ-бошоҡ эшләнде, күрәһең, был эш...

Ҡыҫҡаһы, уҡытыусылар үҙҙәре ни уйлайҙыр был турала, ә бына ата-әсәләрҙең балаларын оҫҡоно ла, ялҡыны ла тыумаҫ борон һүнгән, уртаса ғына кимәлле, заман арбаһынан төшөп ҡалырға тейешле "педагог" ҡулына бирергә теләмәүе аңлашыла. Әммә был хатаны кисекмәҫтән төҙәтергә кәрәк икәнен дә инҡар итмәйек. Бәлки, ысынлап та БДИ тапшыртырға кәрәктер ошондай уҡытыусыларҙан? Кем нисек уйлай ошо хаҡта, әйҙә, фекерләшәйек!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Үҙәк штабы экология һәм урманды һаҡлау проблемалары буйынса Йәмәғәт мониторингы үҙгән булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Проекттың төп маҡсаты - Рәсәйҙә урманды вәхшиҙәрсә ҡырҡыуҙы туҡтатыу. Ошо өлкәлә иң күп тәртип боҙоуҙар теркәлгән төбәктәрҙә Халыҡ фронты йәмәғәт мониторингының айырым төркөмдәре ойошторола саҡ. Тәүге төбәк төркөмдәре март аҙағында уҡ эшләй башлаясаҡ тип күҙаллана. Рослесхоз һәм Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 2010-2013 йылдарҙа Рәсәйҙә урманды законһыҙ ҡырҡыуҙың 87,8 мең осрағы асыҡланған, 44,2 миллиард һумлыҡ зыян килтерелгән.

✓Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының 2015 йылда предприятие хеҙмәткәрҙәрен эштән бушатыу буйынса күҙаллауына төҙәтмә индерелде. Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итеүенсә, 1 мартҡа күҙаллауҙар буйынса, 6,5 мең хеҙмәткәр эштән ҡыҫҡартыласаҡ. Хеҙмәт баҙарындағы хәлдең киҫкенләшеү ихтималлығы шарттарында иҫкәртеүсе саралар күрелә, атап әйткәндә, икенсе һөнәр үҙләштереү программаһы ғәмәлгә ашырыла.

✓Был көндәрҙә бөтә донъя Рудольф Нуриевтың тыуған көнөн билдәләй. Бөгөн XX быуаттың мәшһүр бейеүсеһе һәм хореографына 77 йәш тулған булыр ине. Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжында ошо датаға арналған иҫтәлекле саралар үтте. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры "Руди - Never off" спектаклен күрһәтте. Башҡорт опера һәм балет театрында Рудольф Нуриев исемендәге XX Халыҡ-ара балет сәнғәте фестиваленә әҙерлек эштәре бара. Фестиваль 22 мартта асыла.

✓"Рәсәй вертолеттары" холдингы "Күмертау авиация етештереү предприятиеһы" (КумАПП) асыҡ акционерҙар йәмғиәтен финанс һауыҡтырыу программаһы әҙерләй башланы. Ошо көндәрҙә предприятиеға финанс-иҡтисади һәм производство блоктары белгестәре, персонал менән идара итеү һәм һатып алыуҙарҙы ойоштороу буйынса дирекция составында холдингтың эшсе төркөмө килде.

**"Башинформ"дан.**

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ӨФӨЛӘ - БӘПЕС ТУЙҘАРЫ!

**Башҡортостандың баш ҡалаһында һуңғы 15 йылда тыуым буйынса рекорд ҡуйылды.**

"Күрсөкмө? Ишеткәнебеҙ ҙә юҡ! Беҙ ҡауҙы күтәбеҙ әле", тип фекер йөрөттө йәш өфөләләр һәм ... тыуым буйынса рекорд күрһәтте. Былтырҙан бирле иҡтисадтағы "һикәлтәләргә" ҡарамайынса, Өфөлә ысын мәғәнәһендә бәпес туйҙары гөрләй. Былтыр, мәҫәлән, баш ҡалабыҙҙа 18 меңгә яҡын (17 972) сабый донъяға килде. Был шартлы рәүештә һәр мең кешегә - 16,2 бала, тигән һүҙ. Ә Башҡортостан буйынса уртаса күрһәткес - 14,9. Әйткәндәй, был йәһәттән Башҡортостан Волга буйы Федераль округында беренсе урында тора. Тәбиғи үҫеш буйынса иһә беҙ (+6 949) Татарстандан( +9 732) ғына ҡалышабыҙ.

"Бында ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ, - ти Өфө ҡала округы хакимиәтенең дәүләт статистика бүлеге начальнигы Валентин Сотниченко, - был 11987 йылғы демографик ҡаҙаныш һөҙөмтәһе - ул саҡта ла Өфөлә18 мең бала тыуғайны. Ә 1987 йылғы бәпестәр 1961 йылғы демографик күрһәткестәр һөҙөмтәһе ине. Һәм артабан да шулай - был тәбиғи циклдар".

Белгестәр фекеренсә, бындай күренеш бала тыуҙырыу йәшендәге ҡатындар һанынан да тора. Әлеге көндә 25-29 йәштә бала табыусылар күп, ә 15 йыл элек әсә булыусылар нигеҙҙә 20-24 йәшлек ҡатындар ине. Әсәлек йәше әкренләп өлкәнәйә бара, ғаиләләр һуңыраҡ булһа ла аңлы рәүештә уйлап бәпес алып ҡайта. Шул уҡ ваҡытта демографик күтәрелештәр менән түбәнгә тәгәрәүҙәрҙең иҡтисади сәбәптәрен дә иҫәптән алып ташлап булмай. Тыуым юғары үрләй башлаған 1984 йылда Өфөлә лә, Башҡортостанда ла - һәм, ғөмүмән, тотош илдә балалы ғаиләләргә торлаҡ сиратын тиҙләтергә вәғәҙәләгәйнеләр, ә 90-сы йылдар уртаһындағы түбән тәгәрәүҙәр совет осоронан һуңғы күрсөккә тап килде лә инде.

Былтыр мең кеше иҫәбенә иң юғары тыуым күрһәткестәре Бөрйән районында - 22,5, Әлшәй районы менән Баймаҡ ҡалаһында - 18,8, Баймаҡ районында 17,7 бала тәшкил итте.

**Әйткәндәй, быйыл ғинуар айында Башҡортостанда 4493 бала тыуған, был 2014 йылдың ғинуарына ҡарата 9,7 процентҡа кәмерәк, әлбиттә. Ләкин артабан күрһәткестәр артыуға табан барыуға оҡшаған. 4809 кеше вафат булған - 0,3 процентҡа күберәк. Шулай итеп, 2015 йылдың ғинуарында халыҡтың тәбиғи кәмеүе 316 кеше тәшкил иткән, тип хәбәр итте Башҡортостанстат.**

**Башҡортостанда йышыраҡ ҡан әйләнеше сирҙәре үлемгә сәбәпсе булып тора - бөтә осраҡтарҙың 41,3 проценты. Статистар билдәләүенсә, шештәр (9,9), бәхетһеҙ осраҡтар, ағыуланыуҙар һәм имгәнеүҙәр (8,6), тын юлдары (6) һәм аш һеңдереү ағзалары ауырыуҙары (5,6) ла күпселекте тәшкил итә.**

## БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 70 ЙЫЛ

**Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышындағы еңеүгә 70 йыл тулыуға арналған саралар уҙғарыла башланы. Баш ҡала округы хакимиәтендә һуғышта ҡатнашҡан ветерандарға "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 70 йыл" миҙалын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Өфө мэры Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов 20 һуғыш ветеранын ошо миҙалға лайыҡ булыуы менән ҡотланы.**




# УЛАР ТЕЛЕНДӘ БЕР ТЕЛӘК:

## донъялар тыныс булһын!



Төрлө яҙмышлы кешеләр... Ветерандарҙың һәр береһенең үҙ юлы, үҙ тарихы. Бөйөк Ватан һуғышы тарихы иһә уларҙы берләштергән һәм һәр береһенең күңелендә күҙҙәрҙе йәшкәҙәткән ауыр бер иҫтәлек булып һаҡлана. Бөгөнгө көндә инде унынсы тиҫтәгә киткән бабай-әбейҙәрҙең бәғзеләренә ул ваҡытта 18 йәш тә тулмаған була әле. Улар һуғыштың бар афәтен, ҡыйынлыҡтарын, юғалтыуҙарын үтеп, кисереп, бөйөк Еңеүгә үҙ өлөштәрен индерә, киләсәк быуындарға тыныслыҡ бүләк итә. Ветерандарҙың асылында илһөйәрлек, фиҙаҡәрлек, тыуған ил алдында булған яуаплылыҡты тулы кимәлдә аңлау кеүек оло ҡиммәттәр ярылып ята.

Мәктәп партаһынан һуғышҡа үҙ теләге менән юлланған Фәрит Вәлиев дары еҫен тәүге тапҡыр Ленинградта татый, өс йылға яҡын һуҙылған блокаданы йырыуҙа ҡатнаша. Һуңынан 2-се Украина фронты составында Молдова, Австрия, Венгрияны азат итеп, 1945 йылдың 4 майында, һуғыш тамамланыуға бер нисә көн ҡалғанда, Берлин өсөн барған яуҙа яраланып, еңеүҙе госпиталдә ҡаршылай. Һуғыш уның өсөн Берлинда тамамлана, ләкин хәрби тормош артабан да дауам итә. Хәрби училищены тамамлап, Һауа-десант ғәскәрҙәрендә офицер булып хеҙмәт итә, артабан табипҡа уҡып сығып, 50 йыл Өфөләге хәрби госпиталдә эшләй.

2-се Украина фронтында яу юлын башлаған Хәмит Ваһапов иһә, офицер дәрәжәһендә хеҙмәт итә. Ауыр алыштарҙан һуң бер нисә ҡат ҡаты яраланып, госпиталгә эләгә. Һуңынан Балтика флотына күсерелә һәм еңеүҙе ошо подразделение составында Пиллау портында ҡаршылай. Быйыл фронтовик үҙенең 100 йәшлек юбилейын билдәләгән.

- Беҙ бәләкәй саҡтан аслыҡты, фәҡирлекте күреп үҫтек. Икмәк киҫәгенең тәмен яҡшы беләбеҙ. Йәшлек йылдарыбыҙ һуғыш осорона тура килде, йәшләй фронтҡа юлландыҡ. Бик күптәр унан ҡайта алманы. Һуңынан дәүләтте төҙөкләндереүҙә ҡатнаштыҡ. Тормошобоҙ еңелдән булманы, ләкин зарланманыҡ. Бар ошо мәхшәрҙе үтеп, тере ҡалғандан һуң, ҡабаттан ошондай бәләне, һынауҙарҙы күрергә яҙмаһын, тип теләр инем. Йәштәр ғаиләләр ҡорһон, ил киләсәге өсөн хеҙмәт итһен, донъялар тыныс булһын, - тигән ышанысын белдерҙе һуғышта хәрби осоусы булған Илһам Хәмитов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡаланың бөтә райондарында ла һуғыш һәм тыл ветерандарына "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 70 йыл" миҙалын тапшырыу тантаналары үтте. Өфөлә йәмғеһе 14214 ветеран ошо миҙалға лайыҡ булды.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**



## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы ҡаргиҙәрҙәрҙә ойошторолған экспедиция тамамланды. Уҙышта ҡатнашыусылар 400 саҡрымдан ашыу юл үтте. "Геройҙар иҫтәлегенә" экспедицияһын Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе ойошторҙо. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, ғалимдар, эшҡыуарҙар һәм журналистар Шишмә, Әлшәй, Стәрлебаш һәм Миәкә райондары буйлап ҡаргиҙәрҙәрҙә сәйәхәт итте, төрлө осрашыуҙар үткәрҙе.

✓Өфөлә XXV халыҡ-ара махсуслашҡан "АгроКомплекс-2015" күргәҙмәһе асылды. Уның ойошторoccылары - Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы һәм Башҡортостан күргәҙмәләр компанияһы. Күргәҙмә өс залда һәм "ВДНХ-Экспо" комплексының асыҡ майҙанында уҙа. Унда Рәсәйҙең 32 төбәгенән, Ҡаҙағстандан, Голландиянан, Польшанан, Германиянан, Ҡытайҙан 250-нән ашыу предприятие ҡатнаша. Быйыл "АгроКомплекс" сиктәрендә бал йәрминкәһе һәм орлоҡтар һатыу күргәҙмәһе уҙа. Форумда "Йәнле ферма" эшләй, унда һарыҡтарҙы, ҡоштарҙы, ҡиммәт тиреле кейектәрҙе күрергә мөмкин.

✓"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы яңы эфир сигналына күсте. Телерадиокомпания иҫкергән ҡорамалдарҙан һанлыға күсте. Был хаҡта "Башҡортостан" ДТРК-һы генераль директоры Азамат Сәлихов хәбәр итте. Етәксенең һүҙҙәренсә, ДТРК-да сигналды яҡшыртыуҙың яңы системаһы ҡуйылған.

✓3 апрелдән 8-нә тиклем Ғәлиәскәр Камал исемендәге Татар дәүләт академия театры сәхнәһендә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының гастролдәре уҙа. Гастролдәр алдынан Башҡорт дәүләт драма театры вәкилдәре Татар дәүләт театрында матбуғат конференцияһы ойошторҙо. Театрҙың художество етәксеһе Олег Ханов һәм актрисалар Сара Буранбаева менән Фирүзә Париж ике театр араһындағы ныҡлы бәйләнеш хаҡында һөйләне. 3 апрелдән 8-нә ҡәҙәр Башҡорт дәүләт драма театрында Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең гастролдәре башлана.

✓Баш ҡалала Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле 75 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо йылдар эсендә ижади коллектив Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә танылыу яулап өлгөрҙө. Ғәскәровсыларҙы ҡотларға республика етәкселеге, йәмәғәтселек вәкилдәре, коллегалары килде.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# АЛТЫ УРАМ ҺЕПЕРЕҮСЕ...

## фатирлы булды



**Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү тармағы хеҙмәткәрҙәре ошо көндәрҙә үҙҙәренең һөнәри байрамын билдәләне. Ләкин был өлкә хеҙмәткәрҙәренең байрамдарҙы үҙҙәренең эш урынында үткәреүе ғәҙәти хәл. Ни хәл итәһең, халыҡ был тармаҡ хеҙмәтенән тыш бер минут та йәшәй алмай...**

Ә шулай ҙа байрамға арналған тантаналы сара ойошторолдо. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһе хеҙмәткәрҙәрен БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Сергей Афонин, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай, Өфө ҡала округы Советы депутаттары, баш ҡала районлары башлыҡтары ҡотланы. Үҙ һөнәрҙәре буйынса иң шәбе тип табылған хеҙмәткәрҙәргә "БР-ҙың атҡаҙанған торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәре" тигән исем, Башҡортостан Республикаһының, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының һәм Өфө ҡала округы хакимиәтенең Маҡтау ҡағыҙҙары, Рәхмәт хаттары тапшырылды.

Тармаҡтың маҡтаулы эштәре телгә алынды. 2014 йылда Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ предприятиелары 134 күп фатирлы йортта, 80 ихата биләмәһендә капиталь төҙөкләндереү үткәргән. Бер йыл эсендә генә 700 мең квадрат метрлыҡ юлдар һәм урамдар төҙөкләндерелгән, Әй менән Революция, Баҡалы менән Менделеев урамдары киҫелештәре киңәйелгән. Ә халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү өлкәһе хеҙмәткәрҙәре былтыр граждандарға 22 миллиард һумдан ашыу сервис хеҙмәте күрһәткән.

Тантаналы сараның иң тулҡынландырғыс мәле, һис шикһеҙ, алты урам һепереүсегә торлаҡ сертификаттары тапшырыу булғандыр. Сығыштарҙан мәғлүм булыуынса, урам һепереүселәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙе яйға һалыу мәсьәләһе бынан ике йыл элек ҡуҙғатылған һәм ошо ике йыл эсендә оҙайлы ваҡыт ошо эштә бил бөккән 16 хеҙмәткәргә фатир биреү мәсьәләһе ыңғай хәл ителгән. Онотолған яҡшы иҫке йоланы хәтерләтте был хәл һәм, әлбиттә, ул һәр кемдең ыңғай баһалауына лайыҡ булғандыр, тип ышанғы килә.

Сарала ҡатнашыусы тамашасы фойела тармаҡтың ҡайһы бер предприятиелары эшмәкәрлеге тураһында бәйән иткән күргәҙмә менән таныштылар. Мәҫәлән, "Госинженеринг" компанияһының "Сименс" һәм "Израильэлектрик" компаниялары менән берлектә тормошҡа ашырырға йыйынған "Аҡыллы селтәрҙәр" тип аталған проекты ҡыҙыҡһыныу уятты.

-Ҡаланың электр селтәрҙәрен хеҙмәтләндереүҙе автоматлаштырыуҙы күҙ уңында тотҡан был система берике ай эсендә ғәмәлгә индереләсәк, - тине "Аҡыллы селтәрҙәр" системаһының макеты менән таныштырып "Госинженеринг" хеҙмәткәре Николай Репников. - Ул сағында электр үткәргестәрендә ғәҙәттән тыш хәл килеп сыҡһа, был аҡыллы система уны ни бары ике минут эсендә хәл итәсәк. Әлеге көндә беҙҙең хеҙмәткәрҙәр бындай аварияларҙа зыян күргән сымдарҙы яҡынса ике сәғәт ярым ваҡыт эсендә йүнәтә. Был ваҡыт эсендә, бинала, күп кенә йорттарҙа ут булмай...

**Шулай итеп, беҙ торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тармағы эшенән башҡа йәшәүҙе күҙ алдына килтермәгән кеүек, унда эшләүселәрҙең дә ниндәй көсөргәнештә бил бөгөүе тураһында уйлап ҡарамайбыҙ. Ә уйлап ҡараһаң... Бына шул-шул...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

АЛДАЙҘАР!

# ЭЛЕКТР ИҪӘПЛӘГЕСЕНДӘ...

## алыштыр, тиҙәрме?

**Һуңғы ваҡытта ҡала фатирҙары буйлап электр иҫәпләгестәрҙе алмаштырыуҙы ҡәтғи талап итеп йөрөүсе кешеләрҙең күбәйеүе күҙәтелә. Улар фатир хужаларына талаптарын үтәмәгән осраҡта тарифтарҙың күтәрелеүе һәм хатта утты һүндереү менән янай.**

"Башҡортостан энергетика менән тәьмин итеү компанияһы" ЯСЙ-дә (ООО "Энергетическая сбытовая компания Башкортостана") белдереүҙәренсә, ошо рәүешле ҡайһы бер намыҫһыҙ эшҡыуарҙар аҡса эшләргә маташа. Шуға күрә компания граждандарҙы бик һаҡ булырға һәм ошондай тәҡдим менән шылтыратыусы, фатирға килеүсе "электриктар" хаҡында һис кисекмәстән Өфөләге 257-63-27 телефоны буйынса шылтыратыуҙы һорай.

Шуны ла иҫтән сығармаҫҡа кәрәк: йорттағы иҫкергән электр иҫәпләгестәрен алыштырыу тураһында Йорт советы ҡарар ҡабул итә һәм приборҙарҙы ҡуйыусы ойошманы һайлай. Был хаҡта фатир хужалары мотлаҡ иҫкәртелергә тейеш. Шулай уҡ иҫке иҫәпләгесте һүтеү тик энергия менән тәьмин итеүсе ойошманың вәкиле булғанда ғына башҡарылырға тейеш. Был талаптың үтәлмәүе электр менән тәьмин итеү килешеүен боҙоу тип ҡарала һәм электр уты өсөн иҫәпләүҙәр яңы иҫәпләгес күрһәткестәренә ярашлы түгел, ә РФ ҡануниәтендә ҡаралған икенсе юл менән иҫәпләнә. Ошоларҙы һәм электр уты менән бәйле бөтә төр эшмәкәрлектең дә үтә лә хәүефеле булыуын күҙ уңында тотоп, был өлкәгә ҡағылышлы хеҙмәттәрҙе башҡарыуҙы тик тейешле ойошма вәкилдәренә генә ышанып тапшырырға кәрәк.

Яңы электр иҫәпләгесе үткәргәндән һуң һәр фатир хужаһының ҡулында компанияның реквизиттары, уның адресы һәм телефоны күрһәтелгән килешеү ҡалырға тейеш.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# ТОРЛАҒЫҢДЫ ҮҘЕҢДЕКЕ ИТ!

**Рәсәй Дәүләт Думаһы бушлай торлаҡ хосусилаштырыуҙы 2016 йылдың 1 мартына тиклем оҙайтыу тураһында закон проектын ахырғы уҡыуҙан һуң ҡабул итте.**

"Рәсәй Федерацияһында торлаҡ фондын хосусилаштырыу тураһында" федераль законға ярашлы, Күсемһеҙ милекҡә хоҡуҡ һәм уның менән эш итеү буйынса берҙәм дәүләт реестры бөгөнгө көнгә 1 158 251 граждандың Башҡортостан Республикаһында урынлашҡан 545 292 торлаҡ фонды объектына хоҡуғын теркәгән.

Торлаҡ хосусилаштырыуҙы 2015 йылдың 1 мартына тиклем тип оҙайтылған ваҡыттан алып үткән 2 йыл эсендә торлаҡты бушлай граждандар милкенә күсереү килешеүенә ярашлы, Башҡортостанда 110 меңдән ашыу граждандың 46 меңдән ашыу торлаҡ фонды объектына ҡарата хоҡуғы теркәлгән. Был Реестрҙа теркәлгән дөйөм һандың 9 процентын тәшкил итә.

1992 йылда башланған торлаҡты бушлай хосусилаштырыу, яңы Торлаҡ кодексы ҡабул ителеү менән бәйле, 2007 йылдың 1 ғинуарында тамамланырға тейеш булһа ла, артабан өс тапҡыр оҙайтылды: тәүҙә - 2010 йылдың 1 мартына, аҙаҡ - 2013 йылдың 1 мартына һәм артабан 2015 йылдың 1 мартына ҡәҙәр ине.

"Республикабыҙҙың торлаҡтарын үҙ милкенә күсерергә теләүсе граждандары нигеҙҙә был эште башҡарып бөттө, - ти БР буйынса Росреестр идаралығы етәксеһе Игорь Шеляков. - Йәшәрлек түгел тип табылған иҫке йорттарҙа йәшәүселәр генә ҡалды - улар яңы йорттарға күскәс кенә был ғәмәлде башҡарырға иҫәп тота".

Күптән түгелге пленар ултырышында Дәүләт Думаһы торлаҡты түләүһеҙ хосусилаштырыуҙы 2016 йылдың 1 мартына тиклем оҙайтырға ҡарар итте.

"Был закон проектын ҡабул итеүгә бер нисә мөһим сәбәп булды, - ти Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты Павел Качкаев,- Ҡырым һәм Севастополь халҡының күпселеге торлаҡтарын Рәсәй законы нигеҙҙәрендә үҙ милектәренә күсереп өлгөрмәгән әле. Бынан тыш, иҫкергән йорттарҙа йәшәүселәр ҙә яңы торлаҡ биреләүҙе көтә".

Депутаттың һүҙҙәренә ҡарағанда, оҙайтылған ваҡыт үткәс, бушлай хосусилаштырыуҙы тамамларғамы, дауам итергәме - мәле еткәс, күҙ күрер.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Һипкелдәр

❖ Яҙ һәм йәй петрушканың япраҡтарынан, ә көҙөн уның тамырынан битлек эшләргә. Ит турағыстан үткәрелгән петрушканы таҙартылған бит тиреһенә 20-30 минутҡа һалырға, һалҡын һыу менән йыуырға һәм туҡландырыусы крем һөртөргә.

❖ Петрушка тамыры төнәтмәһенә лимон һуты ҡушып, иртәле-кисле бит тиреһенә һөртөргә.

❖ 1 ҡалаҡ петрушка һутына 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә, битлекте 45 минут тоторға. Уға лимон һуты өҫтәргә лә була. Бының өсөн 2 ҡалаҡ иҙелгән петрушка үләненә 2-шәр ҡалаҡ бал менән лимон һуты өҫтәргә, 15 минутҡа битҡә һөртөргә.

❖ Петрушка һутын әсе ҡатыҡ йәки һөт (тире майлы булғанда), ҡаймаҡ (тире ҡоро булғанда) менән болғарға, 15 минуттан битте йылы һыу менән йыуырға.

❖ Еләк, ҡарағат та тирене ағартыу сифатына эйә.

❖ 25 грамм сүпрәгә 1 балғалаҡ лимон һуты, 1 ҡалаҡ һөт өҫтәргә. Битлекте 20 минуттан һуң йылы һыу менән йыуырға.

❖ 1 лимондың һуты, 1 йомортҡа ағы, 10 грамм шәкәр, 100 мл һыуҙы бергә ҡушып, болғатырға. Бит тиреһенә 20-30 минутҡа һөртөргә. Битлекте көн аша эшләргә.

❖ Сей картуфты ҡырғыстан үткәреп, бер нисә тамсы үҫемлек майы, 1 ҡалаҡ һөт, вәкләнгән миндаль өҫтәргә. 20 минуттан йыуырға һәм тирегә ярашлы крем һөртөргә.

## Стоматит

❖ Стоматит мәлендә стоматолог-пародонтологҡа мөрәжәғәт итеү мотлаҡ. Шулай ҙа ауыртыуҙы еңеләйтеү өсөн түбәндәге саралар ярҙам итер. 1 ҡалаҡ вәкләнгән имән ҡайырыһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға. Һыуынғас, һәр ярты сәғәт һайын ауыҙҙы сайҡатырға.

❖ 10 грамм ҡайын бөрөһөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыулы һауытта 20 минут ҡайнатырға, аҙаҡ төнәтмәнең күләме 200 мл-ға еткән өсөн өҫтәп һыу ҡойорға. Ауыҙҙы сайҡатыу өсөн ҡулланыла.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Әле бына уларҙы саңғыла йөрөп ҡайтып килгән саҡтарында осраттым. Саф һауала йөрөп, кәйефтәре күтәрелеп, бит алмалары алһыуланып ҡайтып килгән көләс йөҙлө ағинәйҙәргә ҡарап һоҡланып туйманым.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ИТЕ - ҺЕҘГӘ...

## һөйәге - миңә

**Ҡорбан өсөн йәш һарыҡҡа өҫтөнлөк бирелеүе лә бушҡа түгел. Ҡорбанға килтерелгән һарыҡ 6-8 айҙан бәләкәй, шул уҡ ваҡытта 2-3 йәштән оло булмаҫҡа тейеш. Уның һимеҙ булыуы, ҡазаланған ерҙәренең булмауы ла мотлаҡ.**

Ҡорбанды йолаларҙы яҡшы белгән иң абруйлы кеше сала. Һарыҡты салған саҡта унда булған кешеләр уның йөнөнә тотоноп ултыра: был һарыҡ уларға сират күперен үтергә ярҙам итәсәк. Ҡорбандың ҡанын һауытҡа йыялар һәм аҙаҡ ергә күмәләр. Түшкәне балта менән сапмайҙар, бысаҡ менән генә бүләләр. Һарыҡтың итен дә, баш-тояғын да, йөрәк-бауырын да, эсәк-ҡарынын да бешерәләр. Килгән кешеләр ҡорбандың бөтөн өлөшөн дә ауыҙ итергә тейеш. Һарыҡтың башын ҡорбан салдырған хужа ашай. Ырымбур өлкәһе башҡорттары әйтеүенсә, ҡорбандың башын, тиреһен хәйер итеп бирәләр. Ҡорбан ашына ҡунаҡтарҙы күп саҡыралар, табынды асып, хужа кеше шулай тип әйтә: "Ашағыҙ, ите һеҙгә, һөйәге миңә".

Табындан ҡалған аш-һыу етемдәргә, ауырыуҙарға, балаларға таратыла. Ҡорбандың һөйәген эткә бирмәйҙәр, йыйып, йылғаға ташлайҙар. Әгәр ҙә яҡын тирәлә йылға булмаһа, ергә күмәләр.

Борон ҡорбанға килтерелгән малдың башы айырыуса ҡәҙер ителгән, уны тәңрегә биргәндәр. Мәҫәлән, Әбйәлил районында балалар ямғыр яуҙырыу өсөн түбәндәгесә һамаҡлай:

*"Яу, яу, Яуметдин,*
*Ҡара тәкә һуйырмын,*
*Башын һиңә ҡуйырмын,*
*Түшен үҙем алырмын,*
*Ингән-сыҡҡан балаларға,*
*Туҡ эсәген бирермен".*

Ошондай уҡ йөкмәткеле һамаҡ Учалы, Мәләүез, Хәйбулла райондары, Ырымбур, Свердловск өлкәһе башҡорттарында ла осрай. Улар бары тик ямғырға өндәшеү формаһы менән генә айырыла: "Яу, яу, ямғырым!" (Учалы), "Һалҡын ағай, кил, кил!" (Мәләүез), "Ямғыр апай, яу, яу!" (Хәйбулла районы, Ырымбур өлкәһе). Яҡынса ошо уҡ һүҙҙәр менән аяҙ көндәрҙе лә саҡыралар. Әгәр ҙә һыу ингән саҡта болот ҡояшты ҡаплаһа, ошолай һамаҡлайҙар:

*"Балҡ, балҡ, ҡояшым,*
*Ҡара тәкә һуяйым,*
*Башын һиңә ҡуяйым,*
*Түшен үҙем ейәйем" (Учалы районы).*
*"Ҡояшҡайым, сыҡ, сыҡ,*
*Ҡара һарыҡ һуйырмын,*
*Майлы ерен ҡуйырмын..." (Яңауыл районы).*

Балаларҙың был һамаҡтары күрһәтеүенсә, башҡорттарҙың ҡорбан һарыҡты ҡояш, һалҡын, ямғыр тәңреһенә бағышлауы күренеп тора. Ҡоролоҡ мәлендә йылға буйында - ҡара һарыҡ, оҙайлы ямғырҙарҙан һуң тау башында аҡ һарыҡ салыу күренеше бөгөн дә һаҡланып ҡалған. "Йәшен йәшнәй, ямғыр юҡ, тимәк, ямғыр һарыҡ һорай", ти ғәйнә башҡорттары.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ



# ЯУЫЗЛЫҠҠА ЯЗА БАР...

**Андрей Малахов алып барған "Һөйләһендәр, әйҙә!" тапшырыуында бер егеттең һөйгән ҡыҙын кәмһеткән өсөн ағалы-энеле икәүҙе һуғып тәгәрәткән ваҡиғаны тикшерҙеләр. Был тапшырыу күптән түгел генә таныш ғаиләлә булған хәл менән бик тә оҡшаш ине, шуға күрә уны башынан аҙағына тиклем ҡыҙыҡһынып ҡараным...**

Үткән көҙ бер танышым, шылтыратып, үҙенең ҡайғыһы менән уртаҡлашты. Илай-илай берҙән-бер улының ауыр хәлдә дауаханала ятыуын һөйләне. Өҙөк-һурыҡ һөйләүенән шуны аңланым: уҡыуҙан ҡайтып килгәндә уға хулигандар бәйләнгән, һыу эскеһеҙ итеп туҡмап, бер ниндәй ярҙамһыҙ урамда ҡалдырып киткән. Мейеһе һелкенгән, танауы һынған.

Был эш, билдәле инде, судҡа тиклем барып етте. Улын яңғыҙы тәрбиәләгән әсәй хулиганды ултыртыуҙарын, уның атай-әсәһенән мораль зыянды ҡаплатыуҙарын, дауаланыуға киткән сығымдарҙы түләтеүҙәрен талап итте. Дауахана менән эше араһында бер үҙе йүгергән, һуңынан бөтә статья буйынса ғәҙеллек даулап, суд тупһаһын байтаҡ тапаған яңғыҙ әсәй, әлбиттә, бик ҡыҙғаныс һәм йәл ине.

Кешелек ҡанундары буйынса уйлап ҡараһаң иһә, был күңелһеҙ ваҡиғала уның улы үҙе ғәйепле ине, әммә күҙ ҡараһы кеүек ҡәҙерләп, ел-ямғыр тейҙермәй үҫтергән әсәй был хаҡта уйлап та ҡараманы. Уның өсөн улын бер ғәйепһеҙгә туҡмағандар, ғәйепле кеше тейешле язаһын алырға тейеш һәм - вәссәләм. Эштең асылы иһә шунда ине: ҡатындың улы курсташ егетенең һөйгән ҡыҙы тураһында хурлыҡлы һүҙҙәр таратҡан. Егет тәүҙә матурлап һөйләшеп, аңлатып ҡараған, ҡыҙға мөнәсәбәттәре ысын булыуын, тиҙҙән уға өйләнәсәге тураһында әйткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, курсташын был да туҡтатмаған. Ҡыҙҙың фотоларын ҡуйып, уның тураһында мыҫҡыллы һүҙҙәр яҙып, социаль селтәргә һалғас, егеттең түҙемлеге һына: урамда осрағанында уға бер тапҡыр киҙәнә... Һөҙөмтәлә уҡыу йорто тормошонда әүҙем ҡатнашҡан, тик яҡшы яҡтан ғына ҡылыҡһырланған студентҡа законға ярашлы тейешле яза билдәләнә. Ә ҡыҙҙың, егеттең саф мөнәсәбәттәрен бысратып, мыҫҡыллы һүҙҙәр таратҡан, уларҙың хистәренән көлгән кеше иһә, киреһенсә, язаһыҙ ҡалды.

Йыш ҡына ошоға оҡшаш хәлдәрҙә үҙе бәхәс-низағтың ҡорбаны булған кешенең яза алыуы менән килешеп булмай. Эйе, бер кемдең дә һуғырға, ҡул күтәрергә, рәнйетергә хоҡуғы юҡ, әммә был осраҡта егеткә ни эшләргә ҡала ине һуң? Намыҫымды, кешелек дәрәжәмде кәмһетте, тип судҡа бирергә була, әлбиттә. Әммә хоҡуҡи яҡтан белемһеҙлек бик көслө беҙҙең йәмғиәттә, үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы белмәйбеҙ. Нахаҡ һүҙ таратҡаны, яманатын таратҡаны, кешенең намыҫын бысратҡаны, һүҙ менән йәберләгәне өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыу хаҡында ғариза яҙыу осраҡтарын ишетергә тура килгәне бар, әммә был бик оҙайлы процесс. Был осраҡта яза ла - тауыҡ көлкөһө генә: йә шелтә, йә бик аҙ күләмдә штраф.

Бер нисә йыл элек балиғ булмағандар комиссияһы ултырышында 3-сө класта уҡыған үҫмерҙең ҡылығы тикшерелде. Ҡылған сәсле, бөтә донъяға аптырап ҡараған асыҡ зәңгәр күҙле, һипкелле малай һаман күҙ алдында. Ул әләсәһенең ни өсөн һығылып илағанын да, өҫтәл артында ултырған таныш түгел апай-ағайҙарҙың нимә һөйләгәнен дә, үҙенең хәле ниндәй аяныслы хәлдә булыуын да аңламай ине. Шуны ғына белә: үҙенән бер йәшкә өлкән ҡыҙыҡайҙың мыҫҡыллы һүҙҙәрен күтәрә алмай, мәктәптән ҡайтҡанда уны этеп йыға. Малай ҡыҙҙың тротуар ситенә башын бәреп, мейеһе һелкенгәненә лә, дауахала ятып сығыуына ла, уның атай-әсәһенең яза биреүен талап итеүенә лә етди әһәмиәт бирмәй, эштең ҡайҙа йүнәлеш алғанын аңламай. Тәрбиәгә ауыр бирелгән, күпләп дәрескә йөрөмәгән, хоҡуҡ боҙған, урлашҡан, һуғышҡан балаларҙы контролдә тотоу өсөн иҫәпкә ҡуйған органдың булыуын да белмәй ине ул...

Бына ошо йәһәттән тәрбиәүи эште ойошторорға ҙур иғтибар бирергә кәрәк беҙгә. Бигерәк тә ата-әсәләргә ҡағыла был. Йәшерен-батырыны юҡ: йәмғиәтебеҙҙә уңышлыраҡ, талантлыраҡ, тырышыраҡ, бәхетлерәк күренгәндәрҙе әҙәпһеҙ, тәрбиәһеҙ, көнсөл кешеләрҙең ағыулы ауы һағалау күренеше бар. Үсекләү, ҡушамат тағыу, кешелек дәрәжәһен хурлау, мыҫҡыл итеү, кәмһетеү һәм һүҙ менән йәберләү ниндәй һөҙөмтәләргә килтергәнен бала бәләкәй саҡтан белеп үҫергә тейеш, сөнки тормош юлында үрҙә атап кителгән кеүек хәлдәргә тарыуы бер ни тормай. Күреүегеҙсә, миҫалға килтерелгән ваҡиғаларҙың өсөһөндә лә "теленә хужа булмағандар" үҙҙәре ғәйепле. Шуныһы ҡыҙғаныс: яза тик үҙен-үҙе яҡлағандарға бирелде. Тик шуны онотorға ярамай: кемгәлер һүҙ менәнме, ҡылыҡ йәки ҡул менәнме эшләгән яуызлыҡ өсөн мотлаҡ ҡаты язаға дусар ителәһең, уның ҡоһоро ҡасан да булһа барыбер башыңа төшәсәк...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# Ә БЕҘҘЕҢ АҒИНӘЙҘӘР...

## саңғыла елдерә!

**Юҡ, яңылыш уҡымағыҙ! Тап шулай! Бөтә яҡлап өлгөр был йор һүҙле ағинәйҙәр Хәйбулла районының Татыр-Үҙәк ауылында йәшәй һәм әүҙем тормош алып бара.**

Татыр-Үҙәк ауылындағы "Ағинәйҙәр ҡоро"н Раушания апай Таҡаева етәкләй. Өлкәнерәк йәштәге ағинәйҙәр (иң олоһона 72 йәш) бергә йыйылып, төрлө дини байрамдар үткәрә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын тергеҙеү буйынса эштәр башҡара, төрлө ярыштар, ултырмалар ойоштора, ә иң мөһиме - был матур сараларға йәштәрҙе лә ылыҡтыра. Күмәкләп ҡул эштәре менән булышыу, йыр-моң кисәләре ойоштороу ҙа улар иңендә. Әле бына уларҙы саңғыла йөрөп ҡайтып килгән саҡтарында осраттым. Саф һауала йөрөп, кәйефтәре күтәрелеп, бит алмалары алһыуланып ҡайтып килгән көләс йөҙлө ағинәйҙәргә ҡарап һоҡланып туйманым. Бына бит, тормош ауырлыҡтарына зарланып ултырмайҙар, ауылдаштарында, яҡындарында киләсәктә барыһының да яйланырына өмөт уятырға тырышып, иманға килергә, матур тормошҡа ышанысты һаҡлап ҡалырға саҡыра улар. Ағинәйҙәребеҙгә һәр ваҡыт шулай ауылдаштарға таяныс булып, көр күңелле булып йәшәүҙәрен, дәрттәре һүрелмәүен теләйем!

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**



АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР

**Мөхәмәтйәр Мөхәмәтшәрип улы Солтанов 1837 йылда билдәле башҡорт дворяндар династияһы Солтановтар ғаиләһендә донъяға килә. Был династия вәкилдәре революцияға тиклем Ҡаҙан даруғаһының Бүләр улысында йәшәй. Ғабийәлил исемле ата-бабалары Солтанов фамилияһын башлап ебәреүсе була. Ул XVIII быуаттың икенсе яртыһында йәшәй. Ғабийәлил 1771-1772 йылдарҙа Польшаға походта ҡатнаша, унан ҡайтҡас, йорт старшинаһы, поручик вазифаларын үтәй. 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы һәм башҡорт ихтилалы барышында хөкүмәткә тоғролоғон һаҡлап ҡала. Баш күтәреүселәр уны ҡулға ала, ләкин иҫән ҡалдыра. 1798 йылда Башҡортостанда кантон системаһы индерелгәс, ул XI Башҡорт кантонының башлығы итеп тәғәйенләнә. Ғөмүмән, был династиянан бик күп старшиналар, кантондар, хәрби һәм йәмғәт эшмәкәрҙәре сыға. Искәндәрбәк Солтанов Граждандар һуғышы йылдарында милли хәрәкәттә әүҙем ҡатнаша, кесе ҡоролтай ағзаһы була, ә ошо уҡ тамырҙан булған Мансур (Мөхәмәтмансур) Солтанов Мәскәү консерваторияһын тамамлап, башҡорттар араһында беренсе профессиональ музыкант була.**

# МӨФТӨЙ МӨХӘМӘТЙӘР СОЛТАНОВ

Мөхәмәтйәр Солтанов ошо династияға ҡараған һуңғы быуын вәкилдәренең береһе була, тиергә мөмкин. Ул 1837 йылда донъяға килә. 1856 йылда Ҡаҙан гимназияһын уңышлы тамамлай. Донъяуи ғилемде, классик телдәрҙе, урыҫ телен яҡшы үҙләштерә, Көнбайыш һәм Көнсығыш әҙәбиәте буйынса ла ғилем ала. Гимназияны тамамлағандан һуң, Ҡаҙан университетына уҡырға инә, ләкин ауырыу сәбәпле, уны ҡалдырырға мәжбүр була. Ул ҡабаттан Минзәлә өйәҙенә ҡайтып, хәрби хеҙмәткә керә. 1857-1859 йылдарҙа Башҡорт ғәскәре командующийының һыҙмасыһы булып эшләй. Ике йыл хеҙмәттән һуң зауряд-хорунжий чинын ала. 1861-1863 йылдарҙа 20-се башҡорт кантоны башлығы вазифаһына үрләтелә. Ә 1863 йылда Минзәлә өйәҙенең 7-се кантонына кантон ярҙамсыһы итеп күсерелә. 1866 йылда хәрби хеҙмәт мөҙҙәтен тултырып, подпоручик чинында отставкаға сыға. Хәрби хеҙмәттән киткәс, 1866 йылда, Минзәлә өйәҙендә мировой посредник итеп тәғәйенләнә, аҙағыраҡ ошо вазифаны Бәләбәй өйәҙендә лә дауам итә. Бер аҙҙан мировой судья итеп һайлана. Ғәҙел мировой посредник, мировой судья булараҡ, Мөхәмәтйәр Солтанов халыҡ араһында ла, түрәләр ҡаршыһында ла ҙур абруй яулай, уға мөһим эштәрҙе хәл итеү яуаплылығы йөкмәтелә.

1885 йылдың ғинуарында Ырымбур Диниә назаратының рәйесе мөфтөй Сәлимгәрәй Тевкелев вафат була. Мөфтөй вазифаһына Ҡаҙан, Ырымбур ғалимдары, мосолман сауҙагәрҙәре, дәүләт эшмәкәрҙәре үҙ кешеләрен тәҡдим итә. Эске эштәр министры граф Д. Толстой император Александр III яҙған хатында: "Замещение этой должности представляется затруднительный ввиду недостатка кандидатов, которые при отсуствии мусульманского фанатизма обладали бы достаточным общим образованием, достаточным знанием русского языка, деловитыми способностями и были вместе с тем преданными и верными исполнителями предначертаний правительства", - ти. Оҙаҡ һайланғандан һуң ике кандидатура тороп ҡала һәм улар Рәсәй эске эштәр министрлығына тәҡдим ителә. Иң лайыҡлыһы һәм кәрәкле талаптарға яуап биреүсе тип Мөхәмәтйәр Солтанов табыла.

Шул ваҡыттағы юғары вазифалы кешеләр араһында алып барылған эшлекле хат алышыуҙарҙан күренеүенсә, был вазифа дәүләт өсөн бик тә әһәмиәтле була. Мөхәмәтйәр Солтанов өсөн тауыш биргән христиан миссионеры Ильминский мәғариф министры Победоносцевҡа яҙған хатында: "Пусть он знает свое относительное положение перед архиреем, но пусть сам знает, а не доводит до крайности такой, чтобы правительство вынуждено напоминать забывшемуся иноверному представителю его пределы и права", - ти. Күренеүенсә, мосолман дин әһелдәренең хоҡуҡтары дәүләттә өҫтөнлөк иткән дин руханиҙарына ҡарағанда әҙерәк була.

Шулай итеп, Мөхәмәтйәр Солтанов Александр III тарафынан Мосолмандар Диниә назаратының бишенсе мөфтөйө итеп һайлана. Шул уҡ йылдың февраль айында ант килтереп, эшкә тотона. Рәсәйҙең иң бай татар ғаиләләренең береһенә ҡараған алдағы мөфтөй Тевкелевтан айырмалы рәүештә, Солтанов матди яҡтан ул тиклем үк хәлле булмай. Шуға күрә лә ул туғыҙ баланан торған ҙур ғаиләне аҫырар өсөн урындағы һәм Петербургтағы властарҙан аҡса һорарға мәжбүр була. Уның мөрәжәғәттәре яуапһыҙ ҡалмай, дауаланыу, хаж ҡылыу, төрлө ерҙәргә йөрөү, балаларҙы уҡытыуға ярҙам өсөн мөфтөйгә пособиелар тәғәйенләнә. Ә Мөхәмәтйәр Солтановтың улына император Николай II указы менән Ырымбурҙағы кадет корпусына ҡаҙна иҫәбенә уҡырға инергә рөхсәт бирелә.

Шуны ла билдәләргә кәрәк: Мөхәмәтйәр Солтанов донъяуи белем буйынса арыу ғына уңыштарға өлгәшһә лә, дин ғилеме унда самалы була. Шуға күрә лә, эшкә тотонғас та ҡазыйҙарға, мөхтәсиптәргә, дуҫ-иш ахундарына ныҡ таяна. Тик ғәрәп телен, Ҡөрьәнде тәфсирләй белмәүе генә бәкәленә һуға. Уға ҡайһы бер кешеләрҙән дәһри, дини наҙан тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә.



М. Солтанов мөфтөй булып эшләй башлаған осорҙа мөфтөйҙәр дини лидер, юғары дәрәжәле рухани ролен үтәмәйенсә, асылда, батша тарафынан тәғәйенләнгән, Рәсәй империяһына тоғро хеҙмәт итер түрәгә әйләнер була. Мөхәмәтйәр Солтанов оло түрәләрҙең дә ышанысын юғалтмаҫҡа, үҙ мосолмандарының да хәтерен ҡалдырмаҫҡа тырыша. XIX быуаттың һуңғы сирегендә мосолмандарҙың дин, мәғариф өлкәһендәге ҡәҙимселәр менән йәҙиттәр тигән төркөмдәре араһында көрәш-тартыштар ҡыҙып киткән осорҙа ла Солтанов ике яҡтың береһенә лә ҡаты бәрелмәй, шул уҡ ваҡытта йәҙитселәрҙе күңеле менән хуплай.

Ул 1893 йылда хаж ғибәҙәтен үтәргә тип биш ярҙамсыһы менән бергә Мәккәгә йүнәлә. Хажиҙарҙың юлдары Ғосман империяһының баш ҡалаһы Стамбул аша үтә. Бында Мөхәмәтйәр Солтановты төрөк солтаны Ғәбделхәмид үҙ резиденцияһында ҡабул итә. Ғосман императоры Рәсәйгә һәм уның мосолмандары мөфтөйөнә хөрмәт йөҙөнән Солтановты Ғосманиә ордены менән бүләкләй һәм, Рәсәй мосолмандарына, тип, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәс бөртөгөн бирә (был сәс бөртөгө бөгөн дә Туҡай урамында урынлашҡан Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назаратында һаҡлана).

Мөхәмәтйәр Солтанов мосолман донъяһында, Рәсәй кимәлендә Диниә назаратының абруйын күтәреү буйынса байтаҡ эштәр башҡара. Назараттың үҙ эске эштәрен тулыһынса тәртипкә һала, архив фондын, бай китапханаһын барлыҡҡа килтерә. Рәсәй мосолман төбәктәре менән танышыу өсөн Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡаҙан ҡалаларынан алып Ырымбур, Пермь, Екатеринбург, Силәбе, Омск, Төмән, Троицк ҡалаларынаса бер нисә ҡат йөрөп сыға. Ахун-имамдар менән генә түгел, ғалим-ғөләмәләр менән дә тығыҙ бәйләнеш урынлаштыра.

Рәсәй Министрҙар Кабинеты рәйесе тәҡдиме буйынса 1905 йылдың 10 апрелендә Өфөлә ахун һәм имамдарҙан торған ҡырҡҡа яҡын вәкилде саҡырып, Диниә назаратының мәжлесен, ҡоролтайын үткәрә. Өфөләге был дини мәжлес 15 апрелгә тиклем һуҙылып, Рәсәй хөкүмәтенә мөрәжәғәт ҡабул итә. Унда Рәсәй мосолмандарының дини, донъяуи, хоҡуҡи мәсьәләләре, мәктәп, мәҙрәсәләр, мәғариф, матбуғат өлкәһе буйынса реформалар, рухи талаптар ентекле бәйән ителә.

Мөфтөй Солтанов Диниә назараты эргәһендәге "Мәғлүмәт" журналына нигеҙ һала. Өфөлә "Ғәлиә" мәҙрәсәһе асылыуға фатихаһын биреп кенә ҡалмай, уның эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнаша. 1914 йылда Солтановтың мөфтөй булып эшләүенә 25, дәүләт хеҙмәтендә тороуона 50 йыл тулыу айҡанлы, Өфөлә ирҙәр өсөн уҡытыусылар әҙерләү институты асыу хаҡында ҡарар сығарыла. "Солтаниә" тип аталған уҡыу йортоноң мөҙҙәте 6 йыл булып, унда дини һәм донъяуи ғилемдәр, туған тел, урыҫ һәм көнсығыш телдәрен өйрәнеүгә иғтибар бирелергә тейеш була. Математика, педагогика, тарих дәрестәре лә үҙәктә тора. Мөфтөй был ниәтте бойомға ашырыу өсөн күп көс һала, ләкин Беренсе донъя һуғышы башланып китеүе, киләһе йылында Мөхәмәтйәр Солтановтың вафат булып ҡалыуы сәбәпле, был мөһим проект тормошҡа ашмай ҡала.

**Йомғаҡлап әйткәндә, Мөхәмәтйәр Солтанов заманына күрә зыялы, билдәле, абруйлы шәхестәребеҙҙең береһе була. Ул Туҡай урамында урынлашҡан Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты мәсете янында ерләнгән.**

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

**(Ғайса Хөсәйеновтың 2002 йылда "Ватандаш" журналында сыҡҡан "Башҡорт дворяндары: Солтановтар, Сыртлановтар" мәҡәләһе; Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты тарихына бәйле документтар файҙаланылды).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР
### Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Башҡорттарҙың күҙаллауы буйынса, башҡа донъя эйәләре кешеләр кеүек, улар бергәләшеп йәшәй, уларҙың ҡатындарының сибәрлегенә таң ҡалырлыҡ. Әгәр ҙә был йән эйәләрен күрергә мөмкинлек булһа, күптәр уларға ғашиҡ булып, яуапһыҙ мөхәббәттән һарғайып үлер ине, тиҙәр. Шулай ҙа кешеләрҙең пәрейҙәр, шүрәлеләр менән ир менән ҡатын булып йәшәүҙәре хаҡында һөйләгән тарихтар бар.

Шулай уҡ шайтан кеше балаһы урынына үҙенең балаһын һалып ҡалдырған, тигән әңгәмәләр ҙә йыш осрай. Шуға ла яңы тыуған сабыйҙы башҡорттар ныҡ һаҡлай, баланың алынған тәүге сәсен йөнгә ҡушып, айыу теше, айыу тырнағы һалып, сепрәк йәки Ҡөрьән доғалары яҙылған тирегә урап тегәләр. Уны бишеккә, баланың баш осона беркетеп ҡуялар.

Тәбиғи һәләттәре менән айырылып торған йән эйәләренән албаҫтыларҙы ла йыш телгә алалар. Албаҫты ҡатын-ҡыҙ сүрәтендә, уны оҙон түштәренән танырға була. Түшен ул елкәһе аша ташлап йөрөй. Төндә албаҫты йоҡлап ятҡан кешене баҫа. Д. П. Никольский яҙыуынса, башҡорттар баш түбәһендә бер күҙе булған ҡатын-ҡыҙ образында йөрөгән яҙмышҡа ла ышанған. Ул ҡасандыр үҙенең балаларын юғалтҡан һәм әле лә төндәр буйына уларҙы кешеләр араһынан эҙләй икән.

Йәндең тәндән айырым йәшәй алыуы тураһында күп һөйләйҙәр. Кеше йоҡлап киткәс тә йән тәндән айырылып сыға һәм сәйәхәт итә. Уның нимә эшләп йөрөүен кеше төшөндә күрә, имеш. Йоҡлап ятҡан кешене шуның өсөн дә ҡапыл уятмайҙар, тәүҙә ипләп кенә исемен әйтәләр. Кеше оҙайлы йоҡоға талғанда - мәрткә киткәндә уның йәне теге донъяға сәйәхәт итә, тип ышанғандар. Әгәр ҙә кеше үҙенең тәбиғи үлеме менән үлмәһә, мәҫәлән, һыуға батһа, уның йотҡан һыуын сығарғас та йәне кире ҡайта, тиҙәр. Йәне юлды тапҡын өсөн һыуға батҡан кешене һыуҙың эргәһенә һалғандар һәм уның ауыҙынан һыуға ҡарай ебәк еп һуҙғандар. Шуның өсөн дә һал ҡыуыусылар үҙҙәре менән гел генә еп йөрөткән. Ҡайһы берҙә йән тәнгә кире ҡайтмай, ул башҡаларға һыуҙа йөҙөп йөрөгән өйрәк йә башҡа төрлө ҡош булып күренә. Кешене күмеп, халыҡ зыяраттан таралышҡас та уның йәне кире әйләнеп ҡайта һәм кеше өсөн икенсе - теге донъя башлана тиҙәр.

Ҡайһы бер саҡта мәрхүмдең йәне кешеләр араһында ҡала. Уны убыр йәки мәскәй, тип йөрөтәләр. Убырға әйләнеү кеше иҫән саҡта уҡ башлана. Йәнен күрәҙәлек һәләте өсөн шайтанға һатҡан сихырсыларҙың барыһы ла убыр була. Уны алдан ғына күреп була, арттан ул күренмәй. Төнөн ул ут булып осоп йөрөй һәм кешеләргә зыян килтерә - ауырыу ебәрә. Сихырсылар үлгәс, башҡа осоп йөрөй алмаһын өсөн, уларҙың үксәһенә энә ҡаҙағандар. Бер версия буйынса, йәне урынында убыр булған кешенең ҡултығы аҫтында тишек була, шул тишек аша уның йөрәген тартып сығарһаң, уны еңәһең. Башҡа мәғлүмәттәр буйынса, ҡултыҡ аҫтында тишек шүрәлеләрҙә, аждаһа һәм шайтанда ғына була.

**"Ғаилә ҡороуға оҫталыҡ кәрәкмәй, уны һаҡлап ҡалыу - оло сәнғәт", тигән бер аҡыл эйәһе. Берәүҙәр никахтан һуң башланған донъяуи ысынбарлыҡты йырып үтә алмайынса, һөйөүенән баш тартһа, икенселәр ғүмер юлын йәшәйештең барлыҡ шатлыҡ-ауырлыҡтарын күтәрешеп, бер-береһенә ышаныслы иптәш булып бергә үтә. Һәр ғаиләнең бәхет сере - үҙенсә, ләкин уларҙың һәр береһендә хөрмәт, ихтирам, эшһөйәрлек, ватансылыҡ, айыҡлыҡ төшөнсәләре төп урындарҙы алып тора. Айыҡлыҡ, тигәндән, бөгөнгө ҡоробоҙ ҡунаҡтары Флүрә һәм Раян СӨЛӘЙМӘНОВтар "Айыҡ ауыл" конкурсы еңеүсеһе булған Учалы районы Баттал ауылынан. Улар ауылдарында айыҡ йәшәү рәүешен урынлаштырыуға төп өлөш индереүселәр. Сөләймәновтар менән ғаилә ныҡлығының нигеҙе, балалар тәрбиәләү алымдары тураһында һөйләшәбеҙ.**

**Һәр ғаиләнең үҙенең танышыу-ҡауышыу тарихы була. Ә һеҙҙә яҙмыш нисек ҡауыштырҙы? Бер-берегеҙҙәге ниндәй сифаттар айырыуса күңелегеҙгә ятты?**

**Раян:** Сығышым менән Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылынанмын. Юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң, 1997 йылда, Учалы районы Баттал ауылына география уҡытыусыһы булып эшкә килдем. Мәкләүе, тәрбиәле тормош иптәше булыуын да баһалайым. Ниндәй генә теманы ҡуҙғатһаҡ та, аңғәмәбеҙ һәр саҡ ҡыҙыҡлы һәм фәһемле була - ошо йәһәттән дә билдәләп үткем килә. Бер ултырып матур итеп һөйләшеркәңәшләшеү кешем булыуы менән бәхетем тулы.

**Раян:** Беренсе күргәндә Флүрәнең матур итеп йылмайып тороуы әле булһа күҙ алдымдан китмәй. Уның ошо мөләйемлеге йәшәйешебеҙҙе йәмләй, көнсумыуым да, эшебеҙҙең көсөргәнешле булыуы ла үҙенең ролен уйнағандыр.

**Раян:** Бер-береһенә өйрәнә алмай тартҡылашыуҙар донъялары түнәрәк, ата-әсәһе әҙерләп биргән етешлектә йәшәгән йәштәргә нығыраҡ хастыр ул. "Юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра" тигән мәҡәл бында урынлы түгел - беҙҙең тәүҙә йәшәргә урыныбыҙ ҙа юҡ, кеше йортонда тора инек. Беҙ, киреһенсә, тиҙерәк үҙебеҙҙең донъяны булһәм уның үҙенсәләктәре менән танышыуға тиң. Никахҡа тиклемге һөйөү хистәре тормош ҡорғас яңы сағылышта асыла, ир менән ҡатын ысын мәғәнәһендә яратырға өйрәнә. Был барлыҡ ғаилә парҙарына ла хас, тип уйлайым. Эргәндәге кешене нисек бар - шулай яратырға, уның барлыҡ ҡылыҡтары, холҡо, етешһеҙлектәре менән ҡабул итергә өйрәнеү өсөн күп ваҡыт кәрәк. Был асыштан һуң, әгәр ул ысынлап та һинең икенсе яртың икән, үҙеңдең бер ҡайҙа ла китмәйәсәгеңде, ғүмерлек юлдашың итеп һайлаған ҡатының менән йәшәйәсәгеңде аңлау тағы ла бер асыш була. Мин был ике асыштың да асылын яҡшы төшөндөм һәм яҙмышымдың Флүрә менән бәйле булыуына сикһеҙ шатмын.

**Ғаиләлә һеҙҙең өсөн иң мөһиме нимә һәм ғаиләнең маҡсатын нимәлә күрәһегеҙ?**

дәйҙәр мәсьәләләрҙә икебеҙ бер һүҙҙән булһаҡ, ҡайһы берәүҙәрендә ҡараштар ҡапма-ҡаршылығы менән айырылып тора. Бәхәсләшеп тә китәбеҙ - унһыҙ ҙа булмай икән. Был, бер яҡтан, файҙалы ла, сөнки бәхәс хәҡиҡәт тыуҙыра, тигән бик дөрөҫ фекер бар. Ләкин бындай саҡта бер-беребеҙҙе нисек булһа ла еңергә тырышып, һәр беребеҙ үҙ һүҙен һүҙ итергә теләп бәхәсләшмәйбеҙ, ә балалар өсөн иң яҡшы, файҙалы юлды һайларға тырышабыҙ. Бәхәс тыуҙырған тәрбиә мәсьәләһендә икебеҙҙә лә ҡәнәғәтләндергән фекергә килеү оҫталығына йәшәй-йәшәй өйрәндек. Уртаҡ фекергә килергә өйрәнеү - һәйбәт тәрбиәнең нигеҙе һәм мәғәнәһе.

**Флүрә:** Һүҙгә килешеүҙәр бигерәк тә улыбыҙ Ришаттың тәрбиәһенә ҡағылғанда йыш була. Мин, әсәй булараҡ, уны һәр ваҡыт бәләкәй бала һымаҡ итеп күрәм һәм иркәләргә тырышам,

# АТАЙ ҠУЛЫНДА –

## әсәйҙекендә -

тәпкә тәү тапҡыр аяҡ баҫҡанда уҡ йөҙөнән йылмайыу китмәгән, алсаҡ ҡыҙға иғтибар иттем. Ул - Флүрә ине.

**Флүрә:** Минең мәктәптә икенсе генә йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләп йөрөгән сағым. Күңелдә ауылдан китеп, берәй ҙур ҡалала эшкә урынлашырға тигән ниәт булһа ла, ни өсөндөр уны тормошҡа ашыра алмай йөрөгән ваҡытым ине. Күрәһең, тәҡдирем ебәрмәгәндер, сөнки нәҡ тыуған ауылымда үҙемдең тормош иптәшемде осратырға насип итте Хоҙай.

**Раян:** Тәү күргәндә үк йөрәгемде яуланы Флүрә. Мин дә уның күңеленә яттым буғай - танышыуға ике ай тигәндә, никах уҡытып та ҡуйҙыҡ.

**Флүрә:** Раянды осратҡанға тиклем туғандарҙың, дуҫтарҙың "Ҡасан кейәүгә сығаһың?" тигән һорауына һәр ваҡыт: "Кейәүҙе почта аша яҙҙырып алам, моғайын, килер әле", - тип көләр булдым. Шаяртыуым ниндәйҙер кимәлдә ысынбарлыҡҡа тура килде - тормош иптәшем үҙе ауылыма килде. Ул ваҡытта мин ситтән тороп, юғары уҡыу йортонда белем ала инем, шуға күрә әсәйем ҡулыма диплом алмай тороп, кейәүгә сығыу тураһында уйларға ла ҡушмай ине.

**Раян:** Ләкин уҡып бөтөп өлгөрмәне инде, мин көләш итеп алып ҡуйҙым. Тик бер нигә ҡарамай, һоратырға барғанда ҡәйнә-ҡайнымдың "Флүрә диплом алырға тейеш", тигән талаптарын үтәнек.

**Флүрә:** Раяндың ныҡлы терәк була белеүе уҡыуҙа ғына түгел, ә, ғөмүмән, донъя көтөүҙә лә асыҡ сағыла. Уның һәр аҙымын уйлап эш итеүе, сабыр булыуы, киң күңеллелеге тормошобоҙҙо ышаныслы итә. Шулай ҙа күңелемде ул, тәү сиратта, тыныс булыуы менән арбаны. Ниндәй генә хәлдә лә албырғып ҡалмай, ә сабыр, тотанаҡлы эш итә. Тағы ла Раяндың аҡыллы, күп белдәребеҙҙе сағыуыраҡ итә. Шулай уҡ көләшемдең ҡунаҡсыл, ярҙамсыл һәм туған йәнле булыуына ла һоҡланам.

**Ғаилә ҡорғандың тәүге йылдарында әлегәсә бер-береһенә ят, төрлө мөхиттә буй еткергән ике кешенең бер-береһенә яраҡлашып, аңлашып китеүе бик үк еңелдән булмай. Һеҙҙең ғаиләлә ошо осор нисек үтте?**

**Флүрә:** Бергә йәшәй башлаған ғына ваҡытта үҙемдекен һүҙ итә алмай илаған саҡтарым да күп булды. Ниміләр минеңсә булмаһа, күңелгә ныҡ ауыр була торғайны. Хәлемде аңлаптыр инде, Раян минең менән килешә торғайны. Хәҙер шул ваҡыттағы ҡылыҡтарым иҫемә төшһә, унайһыҙ булып китә хатта.

**Раян:** Икебеҙҙе сағыштырып ҡарағанда, мин, ысынлап та, күндәмерәк, шуға күрә үҙгәлеүҙәргә үҙгәлеүҙәр менән кәрәкте бирҙе инде ул тәүге йылдарҙа Флүрә. Төрлө ваҡыттар ҙа, шул иҫәптән, ҡыпсырышлыҡтар ҙа булды тормошобоҙҙа, тик үҙебеҙҙә барыһын ла йырып сыға алырлыҡ көс, оҫталыҡ һәм аҡыл таба алдыҡ. Йәшәй-йәшәй бер-беребеҙҙе өйрәнеп, холоҡтарыбыҙҙы үҙләштереп, теге йәки был ситуацияла һәр кемебеҙ үҙен нисек тотасағын аңлағас, хәл бермә-бер еңеләйҙе. Ҡайһы урында өндәшмәй генә үткәреп ебәрәһең, икенсе осраҡта үҙеңдекен һүҙ итеү өсөн тырышыу кәрәклеген дә аңлайһың һәм ошолай эшләйһең дә.

**Флүрә:** Яңы ғына ғаилә ҡороп йәшәй башлаған йәштәргә был йәһәттән ауырға тура килә, тигән фекерҙә яҡлаусылар күп. Ысынлап та, ҡайһы бер йәш парҙар хатта айырылышыуға тиклем барып етә. Ләкин беҙгә, ниндәй генә хәл-ваҡиғалар, холоҡ күрһәтеү булмаһын, был осорҙо үткәреп ебәреү үтә лә ауыр булды, тип әйтә алмайым. Бында минең уҡыуға башҡоллә дырыу, тормошто ҡотайтыу уйы менән яндыҡ, шуға күрә мөнәсәбәттәр асыҡлап ултырырға ваҡыт та булманы.

**Флүрә:** Эш хаҡы түләнмәгән ауыр ваҡыттарҙа йорт һалырға тура килде. Иҫемдә, эш хаҡы урынына икебеҙгә бәрәр тоҡ шәкәр бирҙеләр. Шуларҙы һатып, төҙөләш өсөн аҙ ғына булһа ла кәрәк-яраҡ алдыҡ. Ул ваҡыттарҙа йәштәргә, йәш белгестәргә матди ярҙам күрһәтеү булманы, бер ниндәй ҙә программалар эшләмәне. Хәҙер иһә йәштәргә был йәһәттән еңелерәк, шуға күрә заманға зарланып ултырмаҫҡа, ә үҙеңә тейешлеһен, йылыһын ваҡытында күреп, аңлап, файҙалана белергә генә кәрәк.

**Ысынынында, бер-береңә өйрәнеү осоро тиҙ генә үтеп тә китмәйҙер һәм ғаилә ағзаларын түҙемлек, сыҙамлыҡ тигән сифаттың ғүмер буйы оҙата барыуы кәрәктер инде ул...**

**Раян:** Бер-береңде өйрәнеүҙең ҡасан да булһа осона сығып етеп була икәненә ышанмайым, сөнки икеһе ике ғаиләлә тәрбиәләнеп, осрашҡанға тиклем бер-береһенә сит булған кешеләр ғаилә ҡороу менән бер бөтөнгә әйләнә алмай. Шуға күрә, беҙ әле булһа бер-беребеҙҙе өйрәнәбеҙ һәм был процесс ғүмер буйы дауам итәсәк. Башҡаса мөмкин түгел.

**Флүрә:** Ғаилә ҡороп ебәрҙең дә, донъялағы иң һәйбәт, иң бәхетле ҡатын менән ир булып китеп булмай. Ниндәй генә көслө мөхәббәт булмаһын, тормош юлында төрлө мәлдәр буласаҡ - абыныу ҙа урап үтмәй, күңел төшөнкөлөгө лә килә. Ләкин һәр осраҡта ла тораһың, үҙеңде ҡулға алаһың һәм алға атлайһың. Сөнки тормош шулай ҡоролған һәм был ғәҙәти хәл.

**Раян:** Өйләнешеү әлегәсә күрмәгән-белмәгән сит илгә барыу

**Раян:** Минеңсә, бер-береңде аңлап, һәр ниәтте лә бер һүҙҙән, бер төптән булып башлау һәм аҙағына тиклем еткереү ғаилә нигеҙенең ныҡлығын тәшкил итә. Шулай уҡ ныҡлы һаулыҡ мөһим. Сәләмәтлек булмаһа, донъя йәме булмай, бер нәмә лә ҡыуаныс килтермәй. Йәшерәк саҡтарҙа һаулыҡҡа бармаҡ аша ҡарайһың, ләкин йылдар уҙған һайын уға иғтибарлыраҡ була бараһың. Шуға күрә балаларҙың спорт менән ихлас шөғөлләнеүен хуплайбыҙ һәм һәр яулаған уңыштарына ихлас ҡыуанабыҙ. Тән сәләмәтлеге менән бер рәттән, рух ныҡлығы ла мөһим икәнен бер ваҡытта ла күҙҙән ысҡындырмайбыҙ.

**Флүрә:** Тормошта даими килеп сығып торған ваҡ әйберҙәргә, ваҡиғаларға иғтибар итмәйенсә, бер-береңә ышанып йәшәү генә ир менән ҡатынды ысын ғаилә итә. Шулай уҡ йәмғиәттең бәләкәй генә, әммә мөһим ячейкаһы булып йәшәү өсөн бер-береңә терәк була белергә лә кәрәк. Бер-береңде табып, бергә ғаилә ҡороуҙың төп маҡсатын ошонда күрәбеҙ.

**Һеҙҙең өс балағыҙ бар, мәктәп балаларын тәрбиәләү ҙә һеҙҙең, уҡытыусыларҙың бурысы бит инде. Тәрбиә тураһында һөйләшеп алайыҡ әле...**

**Раян:** Эйе, уҡытыусылар булһаҡ та, күптәр тәрбиә мәсьәләһен бары тик мәктәпкә, уҡытыусыға ғына япһарып ҡуйһа ла, был өлкәләге төп кеше - ул ата-әсә, әлбиттә. Бала бағыу - ата-әсә иңенә йөкмәтелгән ҡатмарлы ла, шул уҡ ваҡытта күңелле һәм күңелгә ятышлы бурыс. Тәрбиә эшендә ата-әсәнең ҡарашы бер йүнәлештә булыуы күпкә отошлораҡ булһа ла, бар осраҡта ла улар тап килмәй. Беҙҙең ғаиләлә лә шулай: нинә Раян иһә дилбегәне баштан уҡ ҡаты итеп тотоу яҡлы.

**Раян:** Ысынлап та, балаларға ҡарата мөнәсәбәттә ҡамсы күберәк минең ҡулда, ә перәник - Флүрәлә була. Шулай ҙа ҡайһы саҡтарҙа уның ҡулындағы ҡамсы үткерерәк тә, зәһәрерәк тә "электәрә". Ул ваҡытта перәник таратыу минең иңгә төшә.

**Флүрә:** Ләкин тәрбиә мәсьәләһендә мотлаҡ берәүҙең ҡулында перәник, ә икенселә ҡамсы булырға тейеш, тигән ҡараштан сығып эш итмәйбеҙ. Ҡайһы бер моменттарҙа перәник тураһында бөтөнләй онотораға тура килә, ә ҡайһы саҡта ҡамсының кәрәге булмай.

**Раян:** Беҙҙең ғаиләлә бәхәс тыуҙырмаған төп йүнәлеш - балаларыбыҙҙы ололарға, туғандарына ихтирамлы, бер-береһенә иғтибарлы итеп тәрбиәләү. Ошо нигеҙҙә бала күңеленә сабый саҡтан уҡ һалмаһаң, киләсәктә был бушлыҡты тултырып булмаясаҡ.

**Флүрә:** Ҡыҙҙарыбыҙҙы һәм улыбыҙҙы тәрбиәле, рухлы, иманлы, аңлы, кешелекле итеп, хөрмәтле һәм рәхмәтле була белеүсе итеп үҫтереүҙе алдыбыҙҙа торған изге бурыстарыбыҙҙың береһе тип һанайбыҙ һәм ошоға ынтылабыҙ. Был сифаттарға эйә баланың йөрәгендә яуызлыҡҡа, хыянатҡа урын булмай, ә күңеле таҙа кешенең тормошо ла матур була. Шулай уҡ зат-ырыуҙы танып-белеүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Башҡорт үҙенең әлләнисә быуын ата-бабаһын белгән, һанлаған, үҙенең балаларына һөйләгән. Элегерәк ошо мәтур йола онотола башлаған ине халыҡта, хәҙер уның кире ҡайтыуын күреү ҡыуаныслы.

**Раян:** Шәжәрә - бер кешенең йәки айырым ғаиләнең генә тарихы түгел. Ул үҙенә тотош ауылдың, халыҡтың тарихын

✓ ***Зәй эҙләгәнен уйламаған ерҙән тап итте. Яңғыҙ бүре эҙҙәре тейелмәгән ҡар өҫтөндә ярылып ята ине. Ул ҡайҙандыр Бирелеһаҙ шырлығы эсенән сыҡҡан да Бейектүбә тауы тарафтарына тартҡан, һунарсы тәпәй эҙҙәрен самалап торҙо.***



**Иҙрис НОҒОМАНОВ**

# СӘМ

**(Хикәйә)**

Наил Вәлиев һүрәте.

Зәй һаҡлыҡ менән йылыу ситенә килеп баҫты. Йылҡылдап торған таҙа һыу аша күлдең төбө үтә күренеп ята. Боҙ йәнә иҫкәртеүле сытырлап ҡуйҙы. Был юлы оҙайлыраҡ та, ныҡышмалыраҡ та. Шул әҙере ҡайҙандыр хасил булған ифрат ҙур шәүлә йөҙөп уҙҙы. Йәшәгән суртан! Уның ҡара шәүләһе, күңелгә шом һалып, оҙаҡ ҡына күренеп барҙы. Йыртҡыс балыҡ, күрәһең, теге өйрәктәрҙе аңдып ятҡан. Зәйгә ҡурҡыныс булып китте: боҙ емерелеп, шул суртан янына осһаң... Тәрән, һалҡын, яҡын-тирәлә бер кем юҡ...

Асыҡ һыуҙың ҡаршы яҡ ситенә һыйына биргән өйрәктәр, ҡыҙыҡһыныу ҡатыш һаҡлыҡ менән, һунарсыны күҙәтә. Зәй яурынындағы ҡушкөбәген әҙерләп, ҡулына тотто. Мылтыҡты ул бүре атыр өсөн түгел, былай ғына алғайны. Һунарҙа хәлдәрҙең төрлөһөнә осрайһың. Бына лаһа кәрәге тейергә тора: кискелеккә тәмле һурпа булмаҡсы. Икенсе яҡтан, ҡамыш эсендә боҫоп ятҡан йәнлекте өркөтөр. Бүре тигәнең мылтыҡ тауышынан ғына түгел, уның еҫенән дә һәләк ҡурҡа ул.

Хәүеф яҡынлашыуын һиҙгән өйрәктәр, ауыр гөрһөлдәшеп, ҡанаттарына күтәрелде. Зәй ашыҡ-бошоҡ тоҫҡап атып ебәреүгә уларҙың береһе сатай-ботай аҫҡа осто. Тейҙерҙе бит! Ҡыу ҡамыш араһына ҡолаған ата һуна тере ине. Ул, биҙәкле муйынын хәлһеҙ һона биреп, шунда уҡ һыу яғына ынтылды. Зәй тағы атты. Яралы ҡош туҡталғандай итте лә йәнә ҡуҙғалды. Ситтән ҡарағанда ул шыуышып китә алмай аҙапланған йыланды хәтерләтә: шул уҡ тартышыу ҡатыш киҫкен хәрәкәт, сит-ят күҙҙән тиҙерәк юғалыу өсөн ынтылыш. Бер үк ваҡытта ул ярлыҡау һорап ялбара кеүек.

Һунарсы йылыуҙы уратып ҡорбаны янына ашыҡты. Килеп еткәнендә өйрәк урынында юҡ ине. Һыуға шыуып төшкән эҙе күренә, үҙе ғәйеп. Аптырап ҡалған Зәй ян-яғына ҡаранды, һыу өҫтөндә уҙышып барған ике-өс ҡаурый ғына күптән түгел ошо урында һимеҙ өйрәк йөҙөп йөрөгәнлегенә берҙәнбер дәлил. Башҡаһы юҡ. Кәнде теге суртан эше булды. Теләгәненә иреште, оңҡот.

Балыҡҡа хәтере ҡала биреп ҡуйған Зәй асыу менән һыуға төбәп атты ла, теләр-теләмәҫ ары ҡуҙғалды. Мылтыҡ тауышына ҡуҙғып күтәрелгән һайыҫҡандарға ҡарап дөмпөлдәтте, яңғыҙ ҡарғаны атып төшөрҙө. "Ярай инде, суртан да һунарсы, уға ла табыш кәрәк, уның да ашағыһы килә", - тип уйлай кәйефе ҡырылған сәмсел ир. Уның күҙ ҡырына күл ситендәге таллыҡ араһында ниндәйҙер хәрәкәт салыныуға тағы атып ебәрҙе. Билдәһеҙ йән эйәһе йомшаҡ ҡарға ауып төштө. Сел булды шикелле. Юҡ икән, һунарсының алдында дәү йәшел тумыртҡа ята ине. Мәхлүктең ярым асыҡ суҡыштары ситенән бер тамсы ғына ҡан һарҡып сыҡты. Ни эшләне ул, шаҡшы? Бер зыяны теймәгән тумыртҡаны һәләк итте. Өҫтәүенә, үтә һирәк осрар йәшел тумыртҡаны. Ярлыҡау булырмы был эшенә. Әле йылы ғына йомғаҡты усына йомған Зәйгә оят та, уңайһыҙ ҙа булып китте. Хәйер, ул бит ҡапылғара ҡошсоҡтоң тумыртҡа икәнен белмәне. Бар аҡланыуы ошо. Ә "Йәнлектең үҙен асыҡ күрмәй тороп, һис бер ваҡытта ла атма", - тигән һунарсы ҡануны? Ул әлеге ҡанунды тупаҫ боҙҙо. Зәйнулла тумыртҡаға тоҫҡап тәғәйен генә бер ваҡытта ла атҡаны юҡ. Аңғарһа, бөгөн дә атмаҫ ине. Тумыртҡаны үлтергәндең тоҡомо ҡороһон, тигән боронғолар. Ошо уйынан һиҫкәнеп ҡуя: әллә был бөгөнгө һунарының уңышһыҙ тамаланыуына бер иҫкәртеүме? Ярай әле улай ғына булһа. Мәгәр тоҡомона сарпыуы ҡағылһа?.. Мылтыҡты нимәгә алды? Атыр өсөн. Мылтыҡ -йәнһеҙ әйбер. Хужаһы ҡушҡан икән, ул атырға, үлтерергә тейеш. Үлтермәгән мылтыҡ насар һанала. Төҙ тейһә лә. Ҡулына мылтыҡ алған кеше - үлтереүсе. Шунһыҙ булмай, һунар - үлтереүселәр шөғөлө. Йән ҡыйырға тәнең тартмай икән, һунарға йөрөп тә ятма. Ә нимә, һыңар тумыртҡа юҡлыҡтан донъя емерелгәнме? Зәй шул рәүешле үҙен-үҙе тынысландырып та, аҡлап та маташты. Ләкин барыбер күңел төпкөлөндә ниндәйҙер юшҡынлы үкенес ҡатыш ауыр тойғо, йөрәгендә төйөр тороп ҡалды. Ул ҡошсоҡтоң йәнһеҙ кәүҙәһен ҡарға күмде, яҫауҙарын кәбәк эсенән алып, саҡсаһына тыҡты ла ары китте: башҡаса тиктомалға тотонһамы ҡоралға...

Уның алдында дала асылды. Күптән түгел генә гөрләп торған дала әле буш. Ноябрь далаһы. Туң, ҡотһоҙ дала. Уның ҡасандыр һабан турғайы бәүелеп уйнаған һауаһында бөгөн йәмһеҙ тауышлы ҡоҙғон осоп йөрөй. Ә ер өҫтөнә, һөйкөмһөҙ һерәйешеп, ҡыу әрем һабаҡтары һибелгән. Кипкән үлән араһында ниндәйҙер ваҡ ҡошсоҡтар мәж килә. Бына ла йәшәйеш! Тәү ҡарашҡа үле күренгән далала тормош дауам итә. Һәүетемсә генә. Зәйҙең болоҡһой башлаған күңеленә еңеллек йүгерә.

Һунарсы ҡаҡ маңлай ише ятҡан ташлы түбәләскә күтәрелеп, түмһә өҫтөнә ултырҙы. Ошо мәл болот йыртығынан ҡояш йылмайҙы. Ул һунарсыға элеккегә ҡарағанда нисектер яҡыныраҡ та, йылыраҡ та булып тойолдо. Рәттән нисәмә көн күренгәне юҡ бит, танһыҡлап кителгән. Арыуы еткән Зәйҙе шунда уҡ йоҡо ауырлығы баҫа, тубыҡтарында ятҡан ҡулдары хәлһеҙ һәленеп төшә. Сағыу яҡтылыҡҡа ирекһеҙҙән күҙҙәрен ҡыҫа биргән һунарсы ойой барғанын тоя. Юҡ, былай ярамай. Бер сама ултырған Зәй, йыбау халәтен еңеп, урынынан ҡуҙғала. Уның ҡапыл һыуынаһы килмәй. Артығын һыуындыңмы, тәнеңдәге еңеллек юҡҡа сыға. Һыуынған тәнде ҡабат ҡыҙҙырып алыуы анһат түгел. Бигерәк тә аяҡтарға төшөп ойоған ҡанды яҙыуы бер афәт.

Быны ул күп тапҡырҙар татып ҡарағаны бар. Шунлыҡтан, был юлы үткән хаталарҙы ҡабатламаҫҡа ҡарар итте. Аяғына баҫыуы булды, алыҫ та түгел, күңелле шаулашып, ялан селдәре күтәрелде, һунарсы күнегелгән хәрәкәттәр менән мылтығын ҡулына алып, тәтегә баҫты: шылт. Уныһы атылманы.

Кискә көтмәгән ерҙән томан төштө. Ул шул тиклем ҡуйы, биш-алты аҙымдан бер ни күрермен тимә. Тауҙар араһында булғылай торған хәл. Томандың ундайында йүнәлешеңде юғалтып, юлдан яҙлығыуы бер ни тормай. Томан - Зәйҙе иң хәүефләндергән күренеш. Шунлыҡтан, ышыҡ, уңай урын һайлап, төндө ошонда уҙғарырға ҡарар итте: яҙмышты һынау кәрәкмәҫ...

Зәй эҙләгәнен уйламаған ерҙән тап итте. Яңғыҙ бүре эҙҙәре тейелмәгән ҡар өҫтөндә ярылып ята ине. Ул ҡайҙандыр Бирелеһаҙ шырлығы эсенән сыҡҡан да шау йәшмә ташлы Бейектүбә тауы тарафтарына тартҡан, һунарсы тәпәй эҙҙәрен самалап торҙо. Елле генәләр. Күпте күргән йыртҡыс. Ҡарт ата бүре. Ә ниңә яңғыҙы? Тимәк, кәрен юғалтып, өйөрҙән ҡыуылған, һәм осраҡлы тап булған ризыҡ менән генә туҡлана, һәр саҡ ярым ас. Шулай икән, хәле лә самалы ғыналыр. Ана, тәүәккәлләп сыҡҡан Зәйгә уңыш үҙе йылмая түгелме? Күрһәтер әле ул йомоҡҡа кемдең кем икәнлеген...

* * *

Күрһәтер әле, тиһә лә, Зәйнулла үҙе күрмәгәнен күреп ята. Уның хәле ахыр сиккә етеп мөшкөлләнде. Ҡыл ҡыбырлатырлыҡ та көсө юҡ. Артабан ни эшләргә? Ошонда ятып... Аһ! Уның йәшәйһе килә. Йәшәйһе, тормошҡа ҡыуанаһы, көләһе, уйсанланып ултыраһы, улының үҫкәнен күргеһе килә. Ә әжәл тигәнең боғаҙынан алмаҡсы. Алмай тор...

Зәй әйләнеп ятты. Былай тын алыуы еңелерәк. Ул, илалла менән, ишелгән ҡар тотҡонлоғонан ҡотола алды. Саңғы, быймалары табылды. Күҙҙәре лә күрә булып сыҡты. Бушҡа хафаланған. Әле, әйгәҙәп, көрт өҫтөндә ятыуы. Ҡара һин уны, ҡайһы аралалыр ҡараңғы ла төшөп өлгөрҙө. Тағы ҡараңғылыҡ. Баш осондағы сикһеҙ бушлыҡҡа йондоҙҙар һибелгән. Эй, йыһан мөғжизәләре - йондоҙҙар! Һеҙ ни эшләп телһеҙ ҙә, өнһөҙ ҙә. Бары бер-берегеҙҙе уҙҙырырға тырышып, емелдәшәһегеҙ генә. Шулай ҙа һеҙ юғында донъя йәмһеҙ. Бына һауаны болот ҡаплап китһен әле...

Ошо мәл кемдер ыңғырашҡандай була. Ә-ә, теге мәхлүк икән. Һеләүһен. Йәне сыҡмаған. Иҫән сағында уны ирекә ебәреү кәрәк. Һүҙ бирҙе бит. Һеләүһен заты үҙ мөхитендә йәшәргә, ирекле булырға тейеш. Ебәреүен ебәрер, ә, теге, намыҫ? Ир намыҫы, сәмле һунарсы намыҫы? Йомабай алдында... Хәйер, уныһы нисәмә тапҡыр ҡабатланды инде... Зәй төптән йыуан, ныҡ кәүҙәле, үҙһүҙле, әйткәненә тоғро, ҡыйыу һәм ғорур. Ҡыҫҡаһы, баш бирмәҫ хас башҡорт. Сәмле ғорурлығы уның хатта артығы менән. Шуның арҡаһында күпме нужа күрә, күпме ыҙа сигә. Бына был юлы ла... Ҡасан да булһа бер еңә алырмы шул ҡырыҫ тәбиғәтен?..

Зәйҙе кемдәрҙер, ҡайҙалыр һөйрәкләй. Уның бараһы килмәй: йәнен аяп ҡаршылашып маташа. Ләкин көстәр тигеҙ түгел, тегеләр күмәк, ул яңғыҙы. Ут бөркөп торған ауыҙ янына еттеләр.

- Бына, һинең эҙләгәнең, - тине берәү. Аһ, теге һуна өйрәк икән. Әҙәмсә һөйләшә.

- Беҙҙең затты һәләк иткәндең урыны ошонда. - Быныһы йәшел тумыртҡа тауышы. Икеһе лә шул тиклем ҙурҙар, Зәй улар ҡаршыһында фил алдындағы сәүек ише генә. Этә-төртә ялҡын бағанаһы янына алып килделәр.

- Ана, күрәһеңме? - тине дәү ҡарға.

-Нимәне?

- Тамуҡтың үҙен.

Күрҙе: алдында күл, уның уртаһында ғәләмәт оло балыҡ башы һерәйеп тора. Теге ут, гөрөлдәп, уның ауыҙынан урғыла икән. Ә тештәре-е! Бәй, үткәндәге суртан да баһа! Уны ике яҡлап күк бүре менән сыбар һеләүһен баҫҡан. Ҡиәфәттәре ҡот осҡос. Өйрәк менән тумыртҡаһынан ярлыҡау булғанда ла, күренеп тора, быларынан ҡотолоу юҡ. Ана, ҡаҙыҡ тештәре нисегерәк ыржайған!

- Һине төртөп осорорғамы, үҙең генә һикерәһеңме? - тип ҡарҡылдай ҡарға. Уға һайыҫҡандар ҡушыла. Ярлыҡауға өмөт селпәрәмә килә.

- Минең әле йәшәгем... Йәшмен. Балаларым... - Зәй ялбармаҡсы итә. - Ә беҙҙең йәшәйһебеҙ килмәй инеме? Сабыйҙарыбыҙ һинекенән күберәк ҡалды. Хәҙер мин һине... - Йәшел тумыртҡа, ынтылып, күҙен соҡорға самалай. - Һин, тинтәк мөртәт, мәңгелек тамуҡ киҫкәһе булырға, йәһәннәмдең иң төбөндә ғазап сигергә тейешһең. - Уҫал ҡош елкәһенән эләктереп, уны ут ҡойонона ырғыта... Аа-а-а!..

Зәйнулла үҙ тауышына үҙе тертләп уяна. Баҫлығып ята икән. Йөрәге дарҫлап тибә. Күргән төшө уйландырырлыҡ... Фәһемле... Йәнә ойой башланы.

- Мин бит тәүбәгә килдем. Ярлыҡағыҙ, изге йәндәр.

- Ә-ә, инде изге булып киттекме?

- Тәүбәгә килеү - бер, шул тәүбәне тотоу икенсе эш. Һин һүҙеңдә тора алманың, һин - буш ҡыуыҡ.

- Ҡара, ҡалайыраҡ яман әйтте, ә, буш ҡыуыҡ.

- Мәсхәрә бит! Нимәһенә әпәүләйһең шуны? Наҙланып тормаға. Ырғыт!

- Аа-а-а!.. - Тағы һиҫкәнә. Саусып уяна ла, күпме генә тырышмаһын, иҙеп килгән йоҡоһона баш була алмай. Мейеһе зәғифләнеүҙән мәрткә китеп барыуымы?..

Бер мәлде ҡолағына ниндәйҙер моң салынып киткәндәй. Әллә ҡурай тауышы инде? Эйе лә, кемдер ҡурайҙа уйнай! Аһаңлеге-е! Ҡайҙандыр төпкөл-төпкөлдән килә кеүек. Ул монда сағылдағы сауҡалар шауы ла, дала ҡылғанының шаян елгә сеңләп һыҙғырыуы ла, тулҡындар һыҡтауы ла, башҡорт иренең өҙҙөрөп йырлағаны ла ишетелеп ҡала. Күңелдәрҙе тетрәндереп, рухтарҙы ҡанатландыра, бар булмышыңды солғап ала ла, йөрәктең иң түренә үтеп инә. Аҡырып илағы ла, шашынып көлгөһө лә килә. Аҡылға һыймаҫ ҡаһарманлыҡтар ҡылаһы килә. Шул ҡәҙәре сихырлай ул моң. Мондоң ындайы тик башҡорт йырҙарында ғына була. Ҡайҙан килә ул?.. Биғәләш, шырлыҡта кем ҡурай уйнап ултырһын? Ҡыш көнө. Буран олой ҙаһа...

Ана, тағы өҙөк-йыртыҡ ауаз ишетелеп ҡала. Был юлы кемдер ҡысҡыра һымаҡ. Асырғанып, өҙгөләнеп ҡысҡыра. Көлкө, ниндәй ҡысҡырыу ти ул? Кеше аяғы баҫмаған төпкөлдә үҙ еңмешлеген еңә алмаған әҙәм арҡырыһы Зәйҙән башҡа кем йөрөп ятһын? Баяғы һуна әйтмешләй, тинтәк. Нисегерәк хаҡ әйтте...

Ошо рәүешле нисәнсе көн ҡаңғыра икән? Үҙе лә иҫәбен

***✓ Ереккә бәйләп ҡуйылған уҫлаптай бүрене күреп, Йомабайҙың да, башҡаларҙың да бөтөнләй һушы китте. Бындайын улар һис көтмәгәндер: бер юлы ике йыртҡыс! Тереләй! Шайтан затынандыр был Зәйнулла.***



юғалтты. Бар донъяға аслыҡ иғлан итте, сөнки ашарына бөттө. Хәҙер туҡтау белмәй ойоҫҡотоп яуырға тотонған ҡар һыуы ла, ылыҫ еҫе аңҡып торған саф урман һауаһы менән генә туҡлана. Бына ҡайҙа ул сәләмәтлектең башы! Шлактарға батҡан тәнде таҙартыу... Зәйҙең һаҡал баҫҡан йонсоу йөҙөндә йылмайыу ғәләмәте сағылып китә. Ҡыҙыҡ, һуҙылып әжәл алдында ята, ә үҙе йылмайып маташа. Тик йылмайыуы йылмайыу түгел - һағышлы.

Халәтенең үтә мөшкөл булыуына ҡарамаҫтан, әле бирелергә иҫәбе юҡ. Ул тырышыптырмашып ҡайтыу яғына бара. Ҡай урында шыуыша, ҡайҙа имгәкләй. Ул ҡайтыр. Ҡайтасаҡ! Юлды яҙлыҡтырып ҡуймаһа... Башта иҫһеҙ ятҡандай тойолған һеләүһен әле буйтым теремекләнде кеүек: ҡуҙғатҡан һайын ғырылдап тауыш бирә. Ҡурҡыта, йәнәһе, ерәү. Ҡапаҡлай. Яҙмышының бөтөнләйе менән һунарсы ҡулында икәнлеген белмәй. Аңһыҙ хайуан. Зәй уны, теләй икән, тере ҡалдыра, теләй икән...

Был тоттормаҫ йыртҡыс нисегерәк килеп ҡапты һуң әле? Ә-ә, уны бит тар ғына ҡая өҫтөндә ҡамағайны. Ике яҡлап упҡын, артабан ҡасыр урын юҡ. Мылтыҡ ҡайышын ҡороҡ итеп, муйынынан алам тигәндә генә аяҡ аҫтындағы алдаҡ ҡар ишелеп китте лә икеһе бергә аҫҡа остолар. Аҙаҡ, үлә-бата ҡар аҫтынан сыға алғас, һушһыҙ ятҡан йәнлекте бәйләп ҡуйыуы ҙур ауырлыҡ тыуҙырманы. Уны хәҙер ауылға алып ҡайтырғамы? Ә әжәл менән яғалашып ятҡандағы анты? Әлеге лә баяғы намыҫ тигәнең? Хәҙер уның эсендә ике намыҫ алыша. Ул намыҫтар сатында тора. Береһе - Йомабай һәм башҡалар алдында абруйынды һаҡлап ҡалыу. Икенсеһе - әйтелгән һүҙ, вәғәҙә. Ҡайһыһы өҫкә сығыр?..

Әжәл сигенә етеп йонсоған Зәй тамам алйыны. Хәнйәр тырнаҡлы тәпәйҙәре бәйле, тештере араһына арҡыры ағас ҡаптырып уралған һеләүһен дә тауыш-тын сығармай. Улар хәҙер икеһе бер хәлдә. Яҙмыштарына буйһонорға йыйыналар, ахыры, һунарсы кейекте сырмап тотҡан бауҙарҙы тағатҡас та әле тегеһе хәрәкәтһеҙ ҡалды. Үҙе һулҡылдай, үҙе тороп китергә теләмәй. Күрәһең, булдыра алмай. Әллә шул рәүешле көс йыя, әллә булып ятҡанға ышанып етмәй, һеләүһендең сыҙамлығы бүренеке менән сағыштырырлыҡ та түгел, һай, әрһеҙ мәхлүк бит ул бүре...

Кеше, ҡырағай бесәйҙең ҡапыл ташланыуынан ҡурҡмайса, уға ҡар киҫәге ҡаптыра. Тегеһе ҡарышмай, йәшәү көсө бирер һутты күренеп торған кинәнес менән йотоп ҡуя. Ул ҡәнәғәт. Кит, азатлығы тулыһынса сикләнгән ҡәнәғәт була аламы? Бер ваҡытта ла! Үҙе лә, ҡар тотҡонында быуылып ятҡанында, ирек өсөн барыһын эшләргә әҙер ине. Хатта намыҫын юғалтыу хаҡына кейектәрҙе ireккә ебәрергә.

Зәй әйткәнендә торҙо. Ул артабан күҙҙәрен ҡыҫа биреп, йәнһеҙгә һалышҡан һеләүһенгә боролоп ҡарай-ҡарай тәнтерәкләне. Хуш, матур, ҡыйыу кейек! Һин ирекле ерҙә донъяға килгәнһең, ирекле йәшәргә тейешһең, һин азат булырға хаҡлыһың. Тик азат булырға! Һис һүҙһеҙ. Аҙ ғына уңайһыҙлыҡтар тыуҙырғанмын икән, ғәфү...

* * *

Зәйнулла һунарсы кемдеңдер ҡаты ғына ҡағылыуынан күҙ ҡабаҡтарын көскә күтәрә алды. Сеү! Ҡаршыһында Йомабай ҡиәфәтле ерәү баҫып тора. Был тиклем дә оҡшар икән. Албаҫты! Арбарға итә. Аһ, улар күмәк! Уратып киләләр. Китегеҙ, иблестәр! Күҙемдән юғалығыҙ! Барыбер тере көйө бирелмәм. Лә-ә илаһа илалла-а... Ғүмерендә тәү тапҡыр үҙ ихтыяры менән иман кәлимәһен иҫенә төшөргән Зәйнулла, һаташыу ҡатыш, рыя ғына ҡулын һелтәй.

- Зәй! Зәйнулла! Дуҫ!

Ана, хатта тауышы ла Йомоҡтоҡо. Дуҫ, тигән була бит әле. Тамбов бүреһе һиңә дуҫ. Ә тегеһе һаман лыҡылдай:

- Күрҙек, дуҫ, барыһын да күрҙек. Мин бит уйнап ҡына... Ә һин...

Күрҙем. Йыртҡыстың ниндәйен тере килеш эләктергәнһең! Һин ысын һунарсы! Һин барыһын уҙҙырҙың... - Балалыҡ дуҫын ошо хәлдә эҙләп тапҡан Йомабай туҡтауһыҙ һөйләнде лә һөйләнде. Уның ҡалтыранып сыҡҡан сыйылдаҡ тауышында үкенес ҡатыш шатлыҡ менән бергә дуҫына ҡарата сикһеҙ ғорурлыҡ та ишетелеп ҡала ине.

- Һеләүһен һынлы һеләүһенде ошоғаса бер кемдең дә тере көйө тотҡаны юҡ. Һин беренсе, һиңә береһе лә етә алмай! Һин афарин!..

Ереккә бәйләп ҡуйылған уҫлаптай бүрене күреп, Йомабайҙың да, башҡаларҙың да бөтөнләй һушы китте. Бындайын улар һис көтмәгәндер: бер юлы ике йыртҡыс! Тереләй! Шайтан затынандыр был Зәйнулла.

- Һо-о, бынығын да... - Йомабай дуҫын мәртәбәләмәксе. Ысҡындыр, - ти тегеһе хәлһеҙ, әммә ҡәтғи.

- Ниңә? Ул бит йыртҡыс... Зыянлы... Исмаһам, тәүҙә ауылдаштарға күрһәтәйек...

-Ысҡындырып ебәр, тим!

Сырмап ҡуйылған бауы бушау менән, аҫтыртын һеләүһендән айырмалы рәүештә, бүре шул әҙере, керештән ысҡынған уҡ ише, эргәләге әрәмәлеккә атылды. Бер ҡатлы йән икән, хәйләләшеп торманы. Бәлки, ирек ҡәҙерен тегегә ҡарағанда артығыраҡ, тулыраҡ беләлер. Ҡыуаҡтар араһына инеп юғалған кейекте күмәк ауаз оҙатып ҡалды.

...Ауылдарына ҡайтып еткәс тә Йомабай иҫ китмәле шәп һунарсы Зәй хаҡында иҫ киткес шәп һүҙҙәр һөйләп йөрөнө. Әле лә һөйләй. Форсаты сыҡҡан һайын. Әлбиттә, был һоҡландырғыс та, әҙәм ышанмаҫлыҡ та эштә үҙенең һис шикһеҙ ҡатнашлығы барлығын ҡыҫтырып ебәрергә онотмай. Ә ике намыҫын бер юлы һаҡлап ҡала алған сәм ҡоло Зәйнулла бынан ары, һунар, тип, ике аяғының берен баҫманы һәм башҡаса мылтығын ҡулына ла алманы. Уны хәҙер сәмләнеп китеп китап яҙа, тиҙәр...

**(Аҙағы. Башы 10-11-се һандарҙа).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨ БАЛАЛАРЫ ЛА...

## әсе көлә белә




**"Минең көләмәстәремдең асылы шунда - кешеләргә дөрөҫөн әйтәм. Иң көлкөлө шаяртыу был", - тигән Бернард Шоу. Тормоштағы күренештәргә ҡарата балалар күҙлегенән сығып бағыу, улар теленән дөрөҫлөктө ишетеү ни тиклем ҡыҙыҡ та, көлкө лә булыуын ошо көндәрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үткән "Шаяниум - 2015" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының финал уйындарына барыусы тамашасы баһаланы.**

Ун өсөнсө тапҡыр үткәрелгән "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының район этаптарында йәмғеһе - 46, ҡала этабында 20 команда үҙ-ара көс һынашҡан. Ә инде 16 мартта үткән финал уйындарында ярыштың бөтә этаптарында ла уңышлы сығыш яһаусы биш команда - "Башҡорттар.ру", "XX централ", "Һупайлы дәрүиштәре", "Хыялый-зыялыйҙар", "Ша-шу-ша" беренселек өсөн көрәште. Баш ҡала мәктәптәре уҡыусылары араһында КВН уйындарын яратып күҙәтеп барыусыларға был командалар күптән яҡшы таныш. Алдағы йылдарҙа тапҡыр шаяртыуҙары менән билдәлелек яулап өлгөргән командаларҙың ҡатнашыусылары үҙгәреүгә ҡарамаҫтан, кимәлдәре шул уҡ юғары ҡалыуы ҡыуандырҙы.

Шулай ҙа башҡорт телендә шаяртыусы квнсыларҙың төрлө ярыштарын бер-нисә йыл рәттән даими рәүештә күҙәтеп барыуҙан һуң шундай һығымта яһарға була: быйылғы "Шаяниум"да сығыш яһаусылар шаяртыуҙар аша көнүҙәк проблемаларға, йәмғиәтебеҙҙе борсоған мәсьәләләргә ҡарата үҙ фекерҙәрен еткерергә тырышты. Әлбиттә, быны жюри ағзалары ла йыл да мотлаҡ талап итеп ҡуя. Шулай ҙа, Рәсәй Федерацияһындағы һәм Башҡортостандағы Әҙәбиәт йылына арналған был "Шаяниум" һәр яҡлап ошо өлкәне яҡтырта алды һымаҡ. Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының "XX централ" командаһы сығышының тәүге өлөшө конкурстың төп темаһы булған "Ал да нур сәс халҡыңа" тигән юлдарҙың асылына төшөндөрөүгә ҡоролғайны. Егерменселәр 25 йылға беренсе тапҡыр үҙҙәренең уҡыу йортона балалар менән осрашыуға килгән яҙыусы-шағирҙарҙың бөгөнгө көндә ниндәй идеялар менән яныуын, уларҙы борсоған проблемаларҙың характерын тулыһынса ярып һалды. Әйткәндәй, ошо шаяртыуҙа Ирек Кинйәбулатовты һынландырған Әксән Кейекбирҙингә "Иң шәп егет" номинацияһы бирелде.

Ә бына Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.ру" командаһы "Һәр ҡоштоң үҙ моңо" тигән тема менән бирелгән "Музыкаль өйгә эш" өлөшөндә шотландтар менән башҡорттарҙы "сәкәштерҙе". "Башҡорттар, һеҙ нишләп сәхнәгә залдың төрлө яғынан килеп сыҡтығыҙ ул?" - тип аптыраған шотландтарға, бөтәһенә лә билдәле лә, шул уҡ ваҡытта ҡыҙғаныс та яуап яңғыраны: "Эй, беҙгә һаман берҙәмлек етешмәй", - тине башҡорт уҙамандары. Залда ултырыусылар зыу килеп көлһә лә, һәр ҡоштоң үҙ моңо, тип моңһоҙланып йөрөүсе милләттәштәр уйға ҡалды, буғай.

Ғөмүмән, быйылғы "Шаяниум"дың шаяндар һәм тапҡырҙары иғтибарынан баш ҡалала, республикала, илдә барған әһәмиәтле хәл-ваҡиғаларҙың береһе лә ситтә ҡалмаған. Хатта ҡайһы бер бигүк мәҙәк тойолмаған көләмәстәр аша ла мәктәп уҡыусыларының һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекере булыуын төҫмөрләргә була ине. Һәр хәлдә, быйылғы "Шаяниум - 2015" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсында Бернард Шоу күҙ уңында тотоп әйткән "иң көлкөлө шаяртыу" тип һаналырлыҡ көләмәстәр яңғырамай ҡалманы. Тамашасы "мәҙәниәт беҙҙең шундай бай - эстрада тулы шалапай", тигәнде лә, күп кенә урындарға атайың кем булыуына ҡарап үткәреүҙәре тураһында ла, башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы тос һүҙҙәр ҙә ишетеп ҡайтты.

"Шаяниум - 2015" конкурсының тағы бер проекты - видеояҙмалар күрһәтеү өлөшө лә быйыл йөкмәткеле һәм үҙенсәлекле генә килеп сыҡҡан. Ярыштың был өлөшө "Өфө - минең яратҡан ҡалам" темаһына бағышланғайны. Был теманы һәр команда үҙенсә яҡтыртҡан, кемдер заманса башҡорт супер-геройын кәүҙәләндергән, кемдер ҡаланың иң билдәле урындары буйлап экскурсия яһаған, кемдер уның төпкөл урындарында ла булып сыҡҡан. Ләкин матурлығын, етешһеҙлеген күрһәткән осраҡта ла балалар баш ҡалабыҙҙы, туған телебеҙҙе һәм халҡыбыҙҙың тарихын ни тиклем яратыуын, ихтирам итеүен сағылдыра алған. Баш ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов "Шаяниум" бәйгеһененең үҫеп килгән быуынды туған теленә һәм мәҙәниәтенә ылыҡтырыуға булышлыҡ иткән сараларҙың береһе булыуын билдәләп үтте. "Ул ысын мәғәнәһендә юмор байрамына, бөтә мәктәп уҡыусыларын да бергә туплаусы яратҡан конкурсҡа әүерелде. Башҡорт гимназиялары, лицейҙары, мәктәптәре менән бер рәттән, уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең дә юғары кимәлдә сығыш яһауы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының, белем усаҡтары етәкселәренең фиҙаҡәр хеҙмәтен асыҡ һынландыра. Киләсәктә был конкурс тағы ла киңерәк ҡолас алыр, командалар иҫәбе күбәйер, тип өмөт итәм", - тине үҙ сығышында Сынтимер Биктимер улы. Мәктәп уҡыусыларының сығыштарын ҡараған, көләмәстәрен тыңлаған һәр кем саранан һуң нәҡ ошо теләктә сыҡҡандыр, тип ышанғы килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙҙең йомғағында "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһененең еңеүселәр исемлеген тәҡдим итәбеҙ. Башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнгән уҡыу йорттары араһында төп урындар түбәндәгесә бүленде:**

**III урын - "Хыялый-зыялыйҙар" (Октябрь районының 159-сы урта белем биреү мәктәбе);**

**II урын - "Ша-шу-ша" (Калинин районының 122-се Башҡорт гимназияһы);**

**I урын - "Башҡорттар.ру" (Республика башҡорт лицей-интернаты).**

**Башҡорт теле дәүләт теле булараҡ уҡытылған мәктәптәр араһында III урынды - "Шаяндар" (Совет районының 108-се урта белем биреү мәктәбе); II урынды - "Генерал балалары" (Дим биҫтәһененең 104-се урта белем биреү мәктәбе); I урынды - "Бал" (Совет районының 96-сы лицейы) командалары яуланы. Ә төп приз - Гран-при Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының "XX централ" командаһына тапшырылды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШ НУРҘАРЫ...
## ҡан баҫымын яйлай

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән анализ ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға бүлышлыҡ итә.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйынса "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алып барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл кеүеһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ

**Баш ҡалабыҙҙағы ҡайтанан ҡороп төҙөлгән мөһабәт ВДНХ-ЭКСПО комплексы янынан үткән һайын, тағы ла бер сауҙа комплексы ролен генә үтәмәҫме был, тип, уның нисегерәк файҙаланыласағын уйлап, баш вата торғайным, сөнки унда ҙур ғына һатыу нөктәләре урынлашып эшләй башлаған да инде. Сауҙа үҙәктәре былай ҙа етерлек баш ҡалабыҙҙа, аҡсаң ғына булһын, әйтәгүр. Инеп күреп сығырға ла форсат булманы әлегә тиклем. Шуға ла эш буйынса ошо күргәҙмә комплексына йомош төшкәс, ҡыуанып ризалаштым. "Өфө-Ладья. Арт.Һөнәрҙәр. Сувенирҙар" тип аталған II Бөтә Рәсәй күргәҙмәһенә илебеҙҙең бөтөн төбәктәренән халыҡ кәсептәре, һәр төрлө ҡул эштәре оҫталары йыйылғайны унда, әммә Башҡортостан экспозицияһынан да сағыуыраҡ эштәрҙе табыуы ҡыйын булды. Бөгөнгө көндә дандары киң таралған Хәйбулла, Баймаҡ, Әбйәлил, Ғафури, Белорет, Стәрлебаш, Ҡариҙел һәм башҡа райондарҙың, шулай уҡ Өфө ҡалаһы һөнәрселәре, ҡул эштәре оҫталары үҙҙәренең ижад өлгөләрен күргәҙмәгә ҡуйғайны. Шуныһы һәйбәт: оҡшаған тауарҙы ошонда уҡ һатып алырға ла мөмкин ине. Сибай "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһы үҙе шефлыҡ иткән "Ете ҡыҙ" һылыуҡайҙар студияһы ҡыҙҙары менән килгәйне. "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзаһы, РФ Мәғариф отличнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Светлана Кинйәбай ҡыҙы БУРАНБАЕВА менән ошо күргәҙмә, ҡор ойошмаһы эшмәкәрлеге һәм, ғөмүмән, донъяуи ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса күстәнәс сәк-сәктән ауыҙ итеп, сәй эсеп, бер арауыҡ ҡына әңгәмә ҡороп алдыҡ.**



# АҒИНӘЙҘӘР ӘЙТЕР АҠЫЛЛЫ ҺҮҘ

**Сибай ағинәйҙәре бында барыбер башҡаларҙан айырылып тора: күмәктәр, берҙәмдәр, бөтәһе лә милли кейемдәрҙә. Һылыуҡайҙарығыҙ ҙа бер тигән: зифа буйлы, ҡыйғас ҡашлы сибәрҙәр. Һеҙҙең ойошма хаҡында "Киске Өфө"нөң яҙып сыҡҡаны булһа ла, уның әүҙемселәре менән күҙмә-күҙ осрашырға тура килгәне юҡ ине әле. Шөкөр, бына күрешергә лә форсат тейҙе. Светлана Кинйәбай ҡыҙы, яңылышмаһам, Һеҙ "Ағинәйҙәр ҡоро"нда ул ойошторолғандан алып эшмәкәрлек итәһегеҙ, буғай?**

- Эйе, һуңғы йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаилә, балалыҡ, әсәлек һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһы етәкселегендә республикабыҙҙа ҡатын-ҡыҙҙар хәрәкәте бик әүҙемләште. Һис кенә лә үҙмаҡсаттан сығып түгел иллә. Быныһ үҙ ғиләһе бар: илгә ауырлыҡ йә берәй һынау килгәндә ҡатын-ҡыҙ, бигерәк тә ағинәйҙәр, алғы планға сығып, аҡыллы һүҙен әйтер, тегеләрҙе йәки был ваҡиғаны көйләп-яйлап ебәрер булған - боронғо халыҡ йолаһы был. Ғаилә, тәрбиә, әхлаҡ өлкәһендә халҡыбыҙ йолалары һәм традицияларын һаҡлау, уны бөгөнгө шарттарға яраҡлы лайыҡлы дауам итеү, яңы һулыш биреү, йәмғиәтебеҙҙәге кире күренештәргә ҡаршы көрәшеү - бына ағинәйҙәр алдына заманыбыҙ килтереп ҡуйған бурыстар. Сибай "Ағинәйҙәр ҡоро" өсөнсө йыл уңышлы ғына эшләп килә. Шөкөр, етәксебеҙҙән уңдыҡ: башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен илебеҙҙә генә түгел, халыҡ-ара кимәлдә пропагандалаусы сәсәнизә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Асия Ғәйнуллина егәрле ойоштороусы ла булып сыҡты. Ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә ағинәйҙәрҙе лә ышаныслы команда итеп туплай алды, улар янына үҙе кеүек тынғыһыҙ, уңған, баҫалҡы башҡорт ҡыҙҙарын да йәлеп итеп, "Ете ҡыҙ" һылыуҡайҙар студияһы ла ойоштороп ебәрҙек.

**Ике ҡуянды бер юлы атҡанһығыҙ икән, былай булғас, бик хуп! Ағинәйҙәр ҡорона ла абруйлы, уҡытыу-тәрбиә өлкәһендә ҙур тәжрибә туплаған маҡтаулы ҡатын-ҡыҙҙар ғына йәлеп ителә икән. Был ойошмаға инергә теләүселәр күп булһа ла, унда яңы ағзаларҙы бик нык "әнә күҙәүенән" үткәреп, конкурс буйынса һайлап алыуығыҙ тураһында ла ишеткәнем бар.**

- Әлбиттә, тик шулай эшләйбеҙ. Абруйҙы бит уны һорап йә һатып алып булмай, йылдар буйы ҡайҙа, нисек, кем булып эшләүеңә лә, шәхси сифаттарыңа, ғаилә хәленә лә ҡарайҙар, шунан ғына аныҡ ҡарарға килә ҡор ағзалары. Ағинәй булыу - ул ҡунаҡ булып, сәйләп йөрөү түгел шул, эшләргә кәрәк! Беҙ ни ғүмер буйы эшләгәнбеҙ тәрбиә, мәғрифәт өлкәһендә, шуға ла, күптән бөтәбеҙ ҙә хаҡлы ялда булһаҡ та бот күтәреп ял итеп ятыуҙы күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ.

**Бик дөрөҫ әйттегеҙ: эшкә йөрөү менән бер һеҙҙең был йәмәғәт бурысығыҙ. Шунһыҙ, әйҙә ултырып ҡына ағинәй тигән вазифаны атҡарыуы мөмкин дә түгелдер. Асия Солтан ҡыҙы һөйләп китеүенсә, һеҙгә ҡала күләмендә үткәрелгән бөтөн мәҙәни саралырҙың уртаһында булырға, гәзит-журналдарҙа, үҙегеҙҙең Сибай телевидениеһында йыш сығыш яһарға, кәрәк икән - йәнәт кенә йыйынып, донъяңды ташлап, бына әлеге шикелле йә Өфөгә, йә башҡа берәй саҡырылған ергә сығып та китергә тура килгеләй икән шул ағинәйҙәргә. Ниндәйҙер шәхси сәбәптәр менән баш тартып та тора алмайһығыҙҙыр. Сөнки намыҫ эше шөғөлөгөҙ, афарин!**

- Эйе, шөғөлдәребеҙ бик күп. "Ете ҡыҙ" һылыуҡайҙарын да милли әхлаҡ нигеҙендә һәр яҡлап матур булырға, киләсәктә хәстәрле әсә, ир ҡатыны булырға, йорт-хужалыҡ эштәренә өйрәтәбеҙ. Йәштәрҙә күркәм зауыҡ тәрбиәләү, уларҙы йәмғиәт һәм ғаилә мөнәсәбәттәренә әҙерләү өсөн ағинәйҙәр үҙҙәре юғары әхлаҡ өлгөһөнә эйә булырға тейеш.

**Хеҙмәтегеҙ һөҙөмтәһе - күҙ алдында. Ҡыҙҙарығыҙ - Сибай уҡыу йорттары студенттары менән таныштым әле генә: Гөлшат Юнысова, Лена Ваһапова, Алина Әминева, Нәркәс Насирова, Минзилә Йәндәүләтова ВДНХ сәхнәһенән тороп, йырланылар ҙа, ҡумыҙҙа ла уйнанылар, бейеләр ҙә."Арҡайым" этник-фольклор төркөмө һәүәҫкәрҙәре булараҡ та билдәлелек яулаған икән улар Сибайҙа. Ә уларҙың күргәҙмәгә алып килгән ҡашмау-түшелдеректәре һуң - күҙ яуын алырлыҡ!**

- Уны ҡыҙҙарыбыҙ ике йыл буйы эшләне: ҡашмау, түшелдеректәрҙе бит тотошлай ваҡ ҡына энйы-мәрйендәр менән ҡаплап-биҙәп, сигеү һалып, мунсаҡ, тәңкәләр ҡаҙап эшләргә кәрәк - нескә, ваҡ эш, ләкин һылыуҡайҙар бер ҙә иренмәне, баш баҫып ултырҙылар. Сабырлыҡҡа, уңғанлыҡҡа, маҡсатҡарына өлгәшеүҙә ныҡлыҡҡа һынау ҙа булды был улар өсөн.

**Ҡала күләмендә башҡарған эштәрегеҙҙән баҡса йәшендәге балалар өсөн "Өләсәйем һандығы" тигән сарағыҙ хаҡында ишетә биреп ҡалғайным, аныҡлабыраҡ низәр әйтерһегеҙ шул хаҡта?**

- Кескәйҙәр аңына барып етерлек итеп сәхнәләштергән был сараның төп маҡсаты - балаларҙы халҡыбыҙ тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырып, ата-бабаларыбыҙ рухына ихтирам тойғоһо тәрбиәләү. Сәхнәлә - боронғо башҡорт өйөнөң бер мөйөшөндә һырлысәмәрле һандыҡ тора. Түрҙә - аллы-гөлләр балаҫ, ҡорама юрғандарҙан таҫлап урын йыйыштырылған. Балаларҙың ике күҙе - һандыҡта: ниҙәр бар икән унда? Бына өләсәй серле һандыҡты аса һәм унан аҫыл таштар, тәңкәләр менән биҙәлгән ҡашмау, түшелдерек, сулыпылар йә камзул сығарып, уның тарихы, тәғәйенләнеше хаҡында һөйләй, аңлата бара. Бына бер саҡ ин төптән "Батырлыҡ өсөн" миҙалын килтереп сығара. Был немец фашистарына ҡаршы батырҙарса һуғышып, еңеү менән ҡайтҡан олатай миҙалы. Хәҙер бит балаларҙың күбеһе һуғышта ҡатнашҡан олатай-картаталарының исем-шәрифтәрен дә белмәй үҫә... Ана шундайҙар булмаһын өсөн үткәрелә бындай тормош дәрестәре.

**Һай, афарин, ағинәйҙәр! Һеҙҙең тағы ла "Айыҡ ғаилә","Атайҙар ҡоро" тигән проекттарығыҙ барлығын беләбеҙ. Урындағы телевидениенан "Арғымаҡта", "Ағинәйҙә ҡунаҡта" тигән тапшырыуҙарығыҙҙы кескәйҙәр генә түгел, өлкәндәр ҙә яратып ҡарай, тип ишеттек.**

- Яҡшы һүҙегеҙгә рәхмәт. Ә шулай ҙа иң ҙур эшебеҙ - "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса 1-се асыҡ ҡала конкурсын ойоштороу булғандыр. Башҡорт, рус, инглиз, немец, француз һәм башҡа телдәрҙә яңғыраны "Урал батыр". Хатта 4 йәшлек балалар араһынан 20 юллыкты яттан һөйләүселәр булды! Тағы ла оло проекттың береһе - асыҡ ҡала кимәлендә үткәрелгән мөнәжәттәр конкурсын билдәләп китмәү һис мөмкин түгел.

**Эйе, был үҙе бер ҙур ваҡиға - халҡыбыҙ күңелендә тере ҡуҙ шикелле балҡыған хәтер хазинаһының тантанаһы булды ул."Киске Өфө" был турала күләмле мәҡәлә менән сығыш яһағайны.**

- Әйткәндәй, быныһ менән генә сикләнеп ҡалмайбыҙ әле беҙ. Мөнәжәт әйтеүселәр конкурсын республика, хатта төбәк-ара кимәлдә үткәрергә йыйынабыҙ. Был юҫыкта ла эшебеҙ уң булыр, тип юрайбыҙ, Алла бирһә.

**Шулай була күрһен. Изге ғәмәлдәрегеҙҙе атҡарыуҙа яңынан-яңы көс-ҡөҙрәт, сәләмәтлек, йәштәрсә сәм теләйбеҙ.**

Фирүзә ИШБИРҘИНА.

✓ *Иртәнсәк уянып китеү менән өҫтәлгә ҡарап алам. Уның өҫтөндә быяла һауыт тора, ә унда, һыу төбөндә, күҙ ята торғайны. Атайымдың күҙе. Шул күҙҙең үҙемә теклəп ҡарағанын күрһәм, тиҙ генә тороп, тышҡа йүгерәм.*



*ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ*

# ҺУҒЫШ ЯЛҠЫНЫНДА СЫНЫҠҠАН УҠЫТЫУСЫЛАР



**Мин 1949 йылдың йәйендә Баймаҡ районының Муллаҡай ауылында донъяға килгәнмен. Иҫ белә башлағанымда, ә ул 50-се йылдарҙың уртаһына тура килә, дары еҫе таралып бөткәйне, алыҫ яҡтарҙан үлем хәбәрҙәре килеүҙән туҡтағайны. Тик ваҡыты-ваҡыты менән урта йәштәрҙәге ике ҡатындың һәм бер ҡарсыҡтың көнсығышҡа ҡарап торған тау башына менеп, шуның иң бейек урынында өнһеҙ генә ултырыуын күҙәтергә тура килә ине. "Әсәй, ни өсөн шул өс апай Оҙонгүл яғына ҡарап тик ултыра?" - тип өндәштем мин бер көндө әсәйемә. "Эй, улым, күңелһеҙ һорау бирҙең бит әле һин миңә, - тип яуапланы әсәйем. - Уларҙың икәүһе һуғышта хәбәрһеҙ юғалған ирҙәрен көтә, ә берәүһе улы ҡайтып килер, тип өмөтләнә..."**

Ул мәлдә миңә биш кенә йәш ине. Һуғыш нимә икәнен әле аңламай инем. Бер мәртәбә ике ирҙең йоҙроҡлап бер-береһен дөмбәсләгәнен ҡарап торғанлыҡтан, "һуғыш" төшөнсәһен шул күренеш менән бәйләй торғайным. Ғәмәлдә иһә, һуғыш йортобоҙҙа йәшәп ятҡан булған ул саҡта. Сабыйлыҡ арҡаһында мин быны аңлау дәрәжәһенә күтәрелеп етмәгәнмен. Атайымдың, әсәйемдең күңелендә йәшәп ятҡан булған һуғыш ана шул замандарҙа.

Сабый сағымда төпкө бүлмәбеҙҙә торған балалар карауатында йоҡлай торғайным. Иртәнсәк уянып китеү менән бүлмә уртаһындағы өҫтәлгә ҡарап алам. Уның өҫтөндә быяла һауыт тора, ә унда, һыу төбөндә, күҙ ята торғайны. Эйе, күҙ. Атайымдың күҙе. Шул күҙҙең үҙемә теклəп ҡарағанын күрһәм, тиҙ генә тороп, тышҡа йүгерәм. Әгәр күҙ икенсе яҡҡа ҡараһа, йомшаҡ түшәктә бер аҙ ятҡас ҡына тороп китәм. Үҙемсә уйлаған булам: атай әле миңә ҡарамай, шуға ятып торайым әле.

Кис, эңер төшкәс, атайым миңә: "Улым, һыуынһа, самауырҙан ҡайнаған һыу килтер әле", - тип алғы бүлмәгә ебәрә торғайны. Самауырҙың һемәгенән быяла һауытҡа һыу ағыҙам да, кире барып, атайыма тотторам. Ул йылдам хәрәкәт менән һул күҙенең аҫ яғына баҫа ла, күҙен килтереп сығара. Шунан, ике бармағы менән тотоп, һыу төбөнә ипле генә итеп төшөрә. Уның хәрәкәттәрен мин дә ҡабатлаған булам, әммә минең күҙем нык тора - һис кенә лә урынынан ҡуҙғалмай. "Мин әле бәләкәймен, шуға күҙҙе урынынан алып булмай. Үҫә төшкәс, минең күҙем дә ысҡыныр әле", - тигән һығымтаға киләм.

Атайымдың бер күҙе ни өсөн алынғанын аҙағыраҡ белдем. Миңә - биш, Әхәт ағайыма - ете, иң өлкән ағайым Фәриткә ун йәш тирәһе булғандыр ул саҡта. Йәйге кистәрҙә, ауылды бер аҙ үтеңкерәп, төнгөлөккә Һаҡмарҙың зөмбәйенә өс ҡармаҡ һала торғайныҡ. Ҡармаҡты тиреҫлектән ҡаҙып алынған ҙур аҡ ҡорт менән емләр инек. Йыш ҡына өс ҡармаҡтың береһенә йә ажау, йә шамбы эләгә торғайны. Ғәҙәттә, ҡармаҡтарҙы ҡарарға иртәнге тығыҙ менән ун араһында бара торғайныҡ. Бер барғаныбыҙҙа табыш булманы. Ырыҫҡужа олатайҙың, Фаиҡа апайҙарҙың йорттарын үтеп, Рәхимйән дуҫымдың өйөнә етеп кенә килгәндә, һул яҡтан йәмһеҙ тауыш ишетелде: "Һынарҡүҙ! Һынарҡүҙ!"

Ҡоймаға терәтеп эшләнгән эскәмйәлә көрән йөҙлө үҫмер ултыра ине. Уға ун биш йәш тирәһе булғандыр. Ҡоймаға арҡаһын терәгән, үҙе һөрәнләй, үҙе аяҡтарын алға-артҡа бәүелтә. Эскәмйә бейек булғанлыҡтан, аяҡтары ергә теймәй үҙенең. Урам буйында башҡа кеше булмағанлыҡтан, һиҙҙем - ул беҙгә ҡысҡыра икән. Нимә әйтергә теләгәнен дә аңламаным мин уның. Ике ағайым еңелсә йүгереп киткәнлектән, мин дә, уңғараҡ тартып, улар артынан эйәрҙем.

Ҡайтып ингәс, әсәйгә шундай һорау бирҙем: "Әсәй, нишләп шул малай беҙҙе "һынарҡүҙ, һынарҡүҙ", тип үсекләй?" Үҙем үҫмерҙең тышҡы күренешен һәм ҡайһы йортта йәшәгәнен һөйләп бирҙем. "Улым, асыуланма һин уға. Атаһы һуғышта ятып ҡалды үҫмерҙең. Уға бер ваҡытта ла "атай" тип өндәшеү бәхете теймәйәсәк". "Ә ни өсөн ул беҙҙе яратмай, "һынарҡүҙ" тип үсекләй?" "Атаңдың бер күҙе юҡ бит, шуғалыр". "Нишләп булмаһын, быяла һауыт эсендә ята бит береһе". "Ул быяла күҙ бит - бер нәмә лә күрмәй". "Ә нишләп атайҙың күҙе берәү генә?" "Һуғышта эснәрәт ярсығы тейгән, шуға уны ҡырҡып алғандар". "Эснәрәт" нимә икәнен аңламаһам да, ҡабат бер нәмә лә һорашып торманым, тышҡа сығып киттем...

Үҫмерҙең ни өсөн беҙҙе яратмауының сәбәбенә бер нисә йыл үткәс төшөндөм. Был атайымдың тәрбиә сараһы менән бәйле булып сыҡты. Ул мәлдә атайым мәктәп етәксеһе булып эшләгән. Уҡыу йылы башланыуға күп ваҡыт ҡалмаған саҡ. Мәктәптең бөтә хеҙмәткәрҙәре - иҙән йыуыусылар, ашнаҡсылар, уҡытыусылар - эшкә йәлеп ителгән. Кемдәрҙер йәшелсә баҡсаһын тәртипкә килтерә, икенселәре ятаҡты йыйыштыра, өсөнсөләре уҡыу бүлмәләренең иҙәнен буяй. Ошо буялған бүлмәләрҙең береһенә инеп, кемдер көн һайын оло ярау итә икән. Кибеп етмәгән иҙәнде тапап, мейес эргәһендә башҡара икән был кеше үҙенең эсле эшен. Атайым бер көн мәктәп урамында беҙҙе үсекләгән үҫмерҙе күреп ҡала. "Иҙәнгә һин ярау итеп йөрөмәйһеңме, улым?" - тип өндәшә уға атайым. "Әптрәхим ағай, нишләп мин булайым. Берәй бәләкәй балалыр ул", - тип үпкәләп яуап бирә был егет.

Хәл тағы ҡабатланғас, атайым ғәйеплене фашларға була. Бер көндө, мәктәптә тәртипкә килтереү эштәре тамамланғас, уҡытыусылар һәм башҡа хеҙмәткәрҙәр ҡайтып китә. Атайым иһә, тәҙрәһе мәктәпкә ҡаратып эшләнгән икенсе йортҡа инеп, шунан күҙәтеп ултырырға ҡарар итә. Күп тә үтмәй, ауыл урамына ҡараған ҡапҡанан түгел, ә аҫ яҡтан әлеге үҫмерҙең килгәнен күрә. Ҡәҙимге генә атлап килмәй - ҡыланып хәрәкәт итә егетебеҙ. Ҡапыл ғына ҡыуаҡ артына боҫоп, тирә-йүндә күҙәтеп алған була. Йәнәһе, дошман биләгән мөхиттә йөрөп ята. Килеп сыҡҡас, бармаҡтарын түңәрәкләндереп, тирә-яҡты ҡарап алған була. Ахыр сиктә, ҡапҡа тишегенән ҡаршы яҡтағы йортто күҙҙән үткәрә. Шунан мәктәпкә инеп китә. Атайым йәһәт кенә урынынан тороп, малайҙың артынан эйәрә. Килеп инһә, егетебеҙ мейес эргәһендә сүгәләп ултыра икән. Бәләкәй генә күләүек яһап, уның эргәһенә тиҙәген дә төшөрөп өлгөргән. Егетебеҙ иҫенә килеп тә өлгөрмәй, атайым ҡолағынан эләктереп ала тегенең. Ниндәй хөкөм сығарырға быға? Күп уйлап тормай атайым - тегенең түбәтәйен алып, тиҙәкте шуға төрөп, хужаһына тоттора. Был эш шул тиклем йәһәт башҡарыла, үҫмеребеҙ иҫенә лә килеп өлгөрмәй. Анра кеше шикелле, түбәтәйен ҡулына тотоп, тышҡа сығып йүгерә хәйләкәр малай. Ошо ваҡиғанан һуң ул беҙҙе, мәктәп етәксеһенең балаларын, ҡыйырһытыуға күсә...

Йәшерен-батырыны юҡ - атайым йомшаҡ кеше булманы. Донъяның михнәттәрен күп күргәнгәлер, тип уйлайым мин бөгөн. 30-сы йылдарҙың иң башында уның атаһын, минең олатайым Фәрукты, Өфө төрмәһенә оҙаталар һәм шунда үлем язаһына хөкөм итәләр. Ғаиләлә иң өлкән бала булғанлыҡтан, береһенән-береһе бәләкәйерәк биш баланы аҫрау өсөн, атайым эшкә төшә. Түбә рудниғы өсөн ағас әҙерләүгә ҡатнаша ул. Ун бер йәштә, яланаяҡ көйө боҙло һыуға инеп, ярға килеп һыуһыған ағастарҙы кире йылғаға этеп төшөрә, ағас ботаҡтарын ҡырҡа, ҡырҡылғанды бер урынға өйөргә ярҙам итә.

Эшкә төшкәндә уның өс класс белеме була. Дүрт йыл эшләгәндән һуң, алтынсы кластарға ҡушылып, Икенсе Әткөлда белемен дауам итә. Бик ауыр була уға тәүҙә, әммә йыл аҙағына ул иң алдынғы уҡыусылар иҫәбендә йөрөй. Етенсе синыфты тамамлағас, Темәс педагогия училищеһына уҡырға инә. Унда дүрт йыл уҡый. 1941 йылдың йәйендә уҡыуын тамамлай. Атайым менән бергә уҡыған Сирғәлина Бибинур сығарылыш кисәһе хаҡында бына нимәләр яҙып ҡалдырған: "Кисә училищеның ашханаһында үтте. Яҡшы ғына ашаныҡ. Эсеү булманы. Ҡыҙҙар таныға төштө. Мин ундай нәмәне белмәгәс, ситтән ҡарап ҡына торҙом. Кисә төнө буйы барҙы. Таңға табан таралыша башланыҡ. Күптәр парланышып алды. Йөрөгән кешем булмағас, мин бүлмәмә ҡайттым. Ана шул таралышҡан ваҡытта һуғыш башланған булған. Беҙ был турала, әлбиттә, бер нәмә лә белмәй инек әле".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Аңығыҙҙы уңышҡа көйләгеҙ

Аңды көйләй белеү - бик мөһим әйбер. Һеҙ үҙегеҙҙең килем кимәлен нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ - был да аңды көйләй белеүгә бәйле. Ул беҙҙең киләсәккә маҡсаттарҙы ла билдәләй. Мин үҙемдең бизнес-командама саҡырған кешеләрҙең барыһына ла, күп аҡса эшләй алыу һәләтенә эйәһегеҙ, тип әйтәм. Әммә бер кеше лә был концепцияны ысынға алмай. Тик йылына 20 мең доллар килем алған кеше 30 мең, 40 мең доллар тураһында ла уйлай бит. Шулай итеп, кешенең аңын да көйләйтергә була. Әгәр ҙә башта йөртөгөҙҙө биҙәү өсөн 75 долларға сәскә һатып алһағыҙ, яйлап бының өсөн 150 доллар ҙа йәл булмаясаҡ, һуңғараҡ был сумманы аҙна һайын сәскәгә тотона башлаясаҡһығыҙ, сөнки тере сәскәләрҙең тормошоғоҙға йәм өҫтәүе үҙегеҙгә оҡшай башлар.

Бер ваҡыт Лас-Вегаста "Дөрөҫ уйлау оҫтаһы" тип аталған курстар үткәрҙем. Беҙҙең отелдәге магазинда 10 мең долларға аҡса янсығы һатыла ине. Курсҡа йөрөүсе бөтөн ҡатын-ҡыҙҙар шул янсыҡты һатып алырға хыялланды, тимәк, был әйбер үҙенең хужаһына оло шатлыҡ тойғолары бүләк итә ала. Ә һеҙ аҡса янсығына, туфлиҙарға, матур пальтоға шул тиклем аҡса түгә алаһығыҙмы? Әлбиттә, йылына 20 мең доллар килем алып, уның яртыһына аҡса янсығы алыу аҡылһыҙлыҡ, әммә ни өсөн һеҙ, күберәк аҡса эшләй алып та, 20 мең доллар менән сикләнәһегеҙ?

Бай булыу өсөн тәүҙә күпме аҡса эшләй алыуығыҙ тураһында аныҡ фекерегеҙ булырға тейеш. Уңышлы кеше алдынғы бөтөн мөмкинлектәрҙе ҡуллана белә, улар тормоштан тик ыңғай нәмәләр генә көтә. Көн һайын һеҙҙең менән булып торған ваҡиғалар ҙа үҙегеҙҙең аңығыҙ менән бәйле. Дуҫым Мэтт менән бейсбол уйнаныҡ та, ҡайтышлай, ашап алыр өсөн, ашханаға туҡтаныҡ. "Беләһеңме, хәҙер нимә була? Уларҙың гриль бешерелгән тауыҡтары бөткәндер инде, моғайын. Бер тапҡыр минең менән шулай булды ла инде. Шундай урында тауыҡтар ҙа бөтә икән?" - инеп барышлай Мэтт шулай тип һөйләнде. Ысынында нимә булды, тиһегеҙме? Мин заказ биргән бөтөн ризыҡтар ҙа булды, әммә грилдә бешкән тауыҡ юҡ ине. Дуҫымдың үҙен ни рәүешле тауыҡ ашауҙан мәхрүм итеүе тураһында оҙаҡ итеп аңлатып торорға булыр ине, әммә быны икенсе юлы эшләрбеҙ. Әлегә аңлы рәүештә уның нимәгә көйләнеүенә иғтибар итегеҙ: ул уның менән берәй насар хәл буласаҡ тип уйлай һәм был тормошҡа аша ла.

Ҡайһы бер кешеләр үҙҙәрен уңышлы, бай тип уйлай, Мэтт һымаҡтар тормоштарын кирегә көйләй. Нимә көтәһегеҙ, нимә өмөт итәһегеҙ - был көн һайын һеҙҙең менән булып торған ваҡиғаларҙы ниндәй төҫтә күрәсәгегеҙҙе, уныһы, үҙ сиратында, тегеләй йәки был ситуацияла үҙегеҙҙе нисек тотасағығыҙҙы билдәләй. Байҙар ғына байый һәм аҡса эшләр өсөн аҡса кәрәк, тип уйлаһағыҙ, һеҙ ярлылыҡтан ҡотолоу өсөн бер нәмә лә эшләмәйһегеҙ. Бай булғым килә, тип уйлаһағыҙ ҙа, эстән быға бөтөнләй ышанмайһығыҙ. Яҡшы нәмәләр башҡалар менән генә була, тигәнгә ышанаһығыҙ икән, ысынлап та, һеҙҙең тормошоғоҙҙа яҡшы бер нәмә лә булмаясаҡ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 23 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 9-я и 10-я серии. Биографический сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 02.50 "Последний романтик контрразведки" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
16.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". Драматический сериал. 7-я серия (12+).
21.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
22.50 "Севастополь. Русская Троя" (12+).
23.55 "Антология Антитеррора" (16+).
01.30 "Противостояние". Детективный сериал (16+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". "Башҡорт йыры". 2013 йыл (12+)

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Новости недели" (6+).**
**12.00 Баскетбол. Первенство РФ. Первая лига. "Уфимец" (Уфа) - "Академия Глобус" (Киров) (0).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0).**
**16.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**16.30, 17.30 Новости (12+).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.45 "Мое блокадное детство" (16+).**
**18.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**18.30 "Два цвета страсти". Сериал (16+).**
**19.30 Новости спорта (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Список контрактов". Худ. фильм (16+).**

## 24 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 11-я и 12-я серии (16+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Структура момента" (16+).
01.20 "Наедине со всеми" (16+).
02.15 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
16.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". Мелодраматический сериал. 8-я и 9-я серии (12+).
22.50 "Зерна и плевелы" (16+).
00.15 "Антология антитеррора" (16+).
01.55 "Противостояние". Сериал (16+).
03.15 "Заговор против женщин" (12+).
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". "Урал моңо-2014". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә. Этнос внутри нас" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости (16+).**
**17.45 Золотой фонд башкирского ТВ. "Сокол из Ыласынтауа" (12+).**
**18.30 "Два цвета страсти". Сериал (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Темы дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "Все говорят, что я люблю тебя". Худ. фильм (16+).**

## 25 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 13-я и 14-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20, 03.05 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.40 "Химия нашего тела. Витамины". Док. фильм.
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Я больше не боюсь". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". 10-я и 11-я серии (16+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Антология антитеррора" (16+).
02.15 "Адвокат". Сериал.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Был тылсымлы донъя". Гөлсөм Бикбулатова. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә. Женщина и кризис" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шатлыҡ йыры" (0+).**
**15.15 "Шәп аарба" (0+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 "История признания" (6+).**
**17.30 Новости (6+).**
**17.45 Золотой фонд башкирского ТВ. "Сокол из Ыласынтауа" (12+).**
**18.30 "Два цвета страсти". Сериал (16+).**
**19.30 "Телецентр" (16+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Представляя интересы людей" (12+).**
**22.45 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.15 "Запретная любовь". Худ. фильм (16+).**

## 26 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.10, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Орлова и Александров". 15-я и 16-я, заключительная, серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант".
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30, 17.10 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
16.00 "Я больше не боюсь" (12+).
17.00, 17.30 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Родина". 12-я серия (12+).
22.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.40 "Антология антитеррора" (16+).
01.20 "Адвокат".
02.50 "Потерянный рай. Ностальгия по Союзу" (12+).
03.50 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". Лилиә Ишемйәрова. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Отчет о результатах деятельности Правительства РБ в 2014 г. (12+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент".**
**11.30, 17.30 Новости.**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 16.30 Новости (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә. Нужны ли свахи?"**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 Концерт.**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.45 Золотой фонд Башкирского ТВ "Соколы из Ыласынтауа" (12+).**
**18.30 "Два цвета страсти" (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**21.30 Новости (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.00 "ФК"Уфа"-наша команда!" (12+)**
**23.30 "А вот и она" (12+).**

## 27 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Орлова и Александров". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
19.15 "Давай поженимся" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Муз. конкурс.
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Городские пижоны". "История студии "Sound City" . Док. фильм (12+).
02.30 "Барбара". Драма (16+).
04.30 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Группа риска". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Я больше не боюсь" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (16+).
23.25 "Иннокентий Смоктуновский. Пророчество для гения" (12+).
00.35 Футбол. Чемпионат Европы-2016. Отборочный турнир. Черногория - Россия. Прямая трансляция.
02.40 "Горячая десятка" (12+).
03.40 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Мөхәббәтле донъя". Лилиә Биктимерова, Фәдис Ғәниев (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя" (12+).**
**12.30, 17.30, 21.30 Новости (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә. Найти свое предназначение" (0+).**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 Концерт.**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Зеркальце" (0+).**
**15.15 "Байтус" (6+).**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.30 Новости (6+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.45 "Позывной "Барс" (0+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Два цвета страсти" (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**23.00 "Остров проклятых" (16+).**

## 28 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.45, 06.10 "Девять дней одного года".
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Иннокентий Смоктуновский. За гранью разума" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.10 "Берегись автомобиля". Худ. фильм.
15.00 "Голос. Дети".
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
19.00 Коллекция Первого канала.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым.
22.55 "Что? Где? Когда?"
24.00 "Что-то в воздухе". Драма (16+).
02.15 "Привет семье". Комедия (12+).
04.10 "Наедине со всеми" (16+).
05.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.40 "Опасно для жизни". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Зойкина любовь" (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.40 "Субботний вечер" (12+).
16.45 "Танцы со звездами". Сезон-2015.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Последняя жертва Анны". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
00.40 "Мамина любовь". Мелодрама (12+).
02.40 "Человек, который знал все". Худ. фильм (16+).
04.45 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Мораҙым Хан". Фильм (6+)
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад
22.00 "Эх, өс егет, өс егет". Театрлаштырылған тамаша (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Барби: Принцесса и Нищенка".**
**09.30 "Здоровое решение". Санаторий "Янгантау" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт. Уральский хребет" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости (12+).**
**12.45 "Наука 102" (6+).**
**13.15 "Орнамент" (0+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 Финал Школьной баскетбольной лиги "КЭС-БАСКЕТ" ПФО (6+).**
**19.30 "Замандаш" (0+).**
**19.45 "Башҡорттар" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**22.00 "Легенда спорта" (6+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (6+).**

## 29 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Формула любви".
08.10 "Служу Отчизне!" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "На 10 лет моложе" (16+).
13.00 "Теория заговора" (16+).
14.10 Коллекция "Первого канала".
17.45 Вечерние новости (с субтитрами).
18.00 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное Время".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+).
00.40 "27 свадеб". Комедия (16+).
02.40 "Крутой чувак" (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.25 "Молодые". Худ. фильм.
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Россия. Гений места" (12+).
12.10 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается". Продолжение.
15.00 "Один в один". Музыкальный конкурс.
18.00 "Танго мотылька". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Дочь баяниста". Мелодрама (12+).
02.35 "Россия. Гений места".
03.30 "Планета собак".
04.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Фидан һәм Азамат Ғафаровтар. Концерт (12+) сеть, конц.(вед.Н.Нургалин, Г.Гайсина)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Тарзан".**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гуль" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Орнамент" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 Гала-программа XI Всероссийского форума боевых искусств (6+).**
**18.15 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**19.30 "История признания" (6+).**
**19.45 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Представляя интересы людей" (12+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели (12+).**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик" (6+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**

✔ *Үткер бысаҡ, һимеҙ ат - табын ҡәҙерен килтерер; яман ҡатын, ялҡау ат - әжәлдән элек үлтерер.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ




Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.

**10-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Айытҡолова. Хисмәтуллина. Яраҡлы. Илаһа. Аталы. Шенатан. Район. Ышаныслы. Сара. Нефертити. Борғо. Айырылыу. Ҡаҡ. Ҡырҡ. Оло. Танзания. Алабарман. Асҡыс. Ельмарен. Сибай. Ятыр. Оялтыр. Ҡурҡҡан. Ихтыяр. Ҡарама. Баҡыева. Ғүмәрова. Барҙа. Резеда. Тарихи. Рабиға. Ылаҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ҡола. Шафиҡова. Булыр. Олатай. Артыҡ. Ярҡа. Ырым. Хыял. Анси. Насар. Ҡартайтыр. Йомаҡ. Нурға. Ыбыр. Ҡыуа. Риза. Инәй. Бирнәлә. Заты. Очиваронго. Тото. Алтыға. Тәнре. Аласыҡ. Йома. Лябурб. Нерль. Нәргиз. Муллыҡ. Алама. Лион. Реноме. Улъя. Наташа.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (3) дүшәмбе | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 18:02 | 19:32 | 21:02 |
| 24 (4) шишәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 18:04 | 19:34 | 21:04 |
| 25 (5) шаршамбы | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 26 (6) кесе йома | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 27 (7) йома | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 28 (8) шәмбе | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 18:12 | 19:42 | 21:12 |
| 29 (9) йәкшәмбе | 5:28 | 6:58 | 13:30 | 18:14 | 19:44 | 21:14 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 март ПРЕМЬЕРА! "Һаран"** (Ж.-Б. Мольер), комедия

**22 март "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия

**24 март "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)

**25 март "Ғәфү ит мине!"** (И. Герман), мелодрама

**26 март "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**27 март Хөрмәтулла Үтәшевтың бенефисы - "Һаран"** (Ж.-Б. Мольер), комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 14.00, 18.00

**24 март "Студенттар"** (Н. Ғәйетбай), лирик комедия

**25 март "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00

**26 март ПРЕМЬЕРА!** "Диңгеҙ ярын иңләй ала эт" (С. Айытматов)

**25 март "Ҡарт кейәүҙәр йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия

**26 март "Ун икенсе төн"** (У. Шекспир), фарс

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 март "Урал ораны"** II Халыҡ-ара милли оркестрҙар һәм ансамблдәр фестиваль-конкурсының гала-концерты

ИҒЛАН



**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 27-30 мартта 6-сы, 7-се класс уҡыусылары өсөн башҡорт теле, математика, рус теле фәндәре буйынса полиолимпиада үткәрә.**

Полиолимпиадала ҡатнашырға теләүсе уҡыусыларға үҙҙәре менән 1-се кластан башлап бөтә уҡыу йылдарына өлгәшеү табеле күсермәһе, тыуыу тураһында таныҡлыҡ (төп нөхсәһе һәм күсермәһе), бер шаҡмаҡлы, ике буй дәфтәр, ручка алып килеү мотлаҡ.

Олимпиада көндәрендә туҡланыу, театрға һәм музейға йөрөтөү ойоштороласаҡ. Бер балаға түләгенә 700 һум түләргә кәрәк буласаҡ.

Ҡабул итеү 27 март көндө ойоштороласаҡ. **28 мартта** иртәнге **9.00** сәғәттә дәрестәр башлана.

Олимпиадала иң яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусылар киләһе уҡыу йылына гимназия-интернаттың 7-се, 8-се кластарына уҡырға саҡырыласаҡ.

**Адрес: Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 88.**

**Беҙҙең электрон адрес: brgil@mail.ru**

Иҫкәрмә: Өфө ҡалаһынан уҡыусылар ҡабул ителмәй.

✔ ***Йыш ҡына милләтте бер кеше ҡотҡара; йыш ҡына милләтте бер кеше харап итә.***

***(П. Буаст).***



*АФАРИН!*

# БӘЛӘКӘЙ ГЕНӘ ЮБИЛЕЙҘА...

## ҙур эштәр барланды

**Мәскәү һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы ойошторолоуға 5 йыл тулды. Баш ҡалабыҙ Мәскәүҙең "Арбат" мәҙәни үҙәгендә ошо тантана киң билдәләнде. Унда Мәскәү һәм Санкт-Петербургтан 500-ҙән ашыу йәштәштәр йыйылды. Ойошманы ҡотларға Рәсәй һәм Башҡортостандан билдәле сәйәсмәндәр, мәҙәниәт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре килде.**




Ассоциация 2009-2010 йылдар араүығында илебеҙҙең иң эре һәм танылған юғары һәм академик уҡыу йорттарында белем алыусы йәштәр көсө менән барлыҡҡа килде. Уның маҡсаты - республикабыҙҙың кадрҙар сәйәсәтенә булышлыҡ итеү һәм баш ҡала йәшәгән башҡорт студенттарының социаль әүҙемлегенә өлгәшеү. Бөгөн Ассоциация баш ҡала вуздарына инергә теләүсе абитуриенттарға ойоштороу һәм мәғлүмәти ярҙам күрһәтә, Башҡортостан мәктәптәрендә һәм юғары уҡыу йорттарында һөнәри йүнәлеш буйынса эш алып бара - ҡыҫҡаһы, Мәскәүҙәге, Санкт-Петербургтағы Башҡортостан йәштәренең милли-мәҙәни үҫешенә һулыш биреүсе ул. Федераль әһәмиәттәге ҡалаларҙа ойошма барлығы 2 меңдән ашыу студент һәм аспирантты берләштерә.

РФ Президенты Идаралығы начальнигы урынбаҫары Радий Хәбиров юбилей тантанаһын рәсми рәүештә асып ебәрҙе. Үҙенең тәбриклү һүҙендә ул бөгөнгө шарттарҙа Ассоциация эшмәкәрлегенең әһәмиәтен билдәләне һәм әүҙем йәштәргә һәр яҡлап булышлыҡ иткәне өсөн Башҡортостан етәкселегенә рәхмәт белдерҙе. "Уҡыуҙы тамамлағас, йәштәрҙе мин тыуған ергә ҡайтып, ең һыҙғанып эшләргә саҡырам", - тине ул.

"Ассоциация Башҡортостандың мәҙәни һәм сәйәси элитаһын булдырыу майҙансыҡы ролен башҡара",- тип билдәләне үҙенең сығышында Башҡортостандың РФ Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Артур Шәйнуров. Ассоциация активистарына һәм Мәскәүҙәге ижади коллективтар етәкселәренә ул Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт, Мәғариф, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт буйынса министрлыҡтарҙың Рәхмәт хаттарын тапшырҙы. Бындай хөрмәткә Нәзир Байегетов, Радмир Мөфтәхин, Руслан Биктимеров, Гөлнара Ибраҡова, Фатима Янбаева, Иҙел Бохарбаев, Илшат Рәхмәтуллин, Азат Хәлиуллин, Фаягөл Юнысова һәм Лилиә Хөснөтдинова лайыҡ булды.

Ассоциацияны шулай уҡ Федераль Йыйылыштың Федерация Советы ағзаһы Рафаил Зиннуров, Дәүләт Думаһы депутаты Рөстәм Ишмөхәмәтов ҡотланы. Дәүләт Думаһы депутаты, "Мираҫ" фонды рәйесе Сәлиә Мырҙабаева тарафынан ойошторолған "Мираҫ" фонды конкурсында еңеүселәр билдәләнде - фән, йәмәғәт эшмәкәрлеге, спорт һәм сәнғәт өлкәһендә өлгө күрһәтеүсе иң яҡшы 11 студент аҡсалата премиялар һәм дипломдар менән бүләкләнде.

Ассоциация етәксеһе Азат Баҙранов әйтеүенсә, 5 йыл эсендә теләгән бер мәсьәләне тормошҡа ашырырға һәләтле берҙәм команда тупланды. "Студенттарыбыҙ үҙаллы ҡарарҙар ҡабул итеп, уның һөҙөмтәһе өсөн яуаплылыҡ тоя белгән лайыҡлы шәхестәр булып үҫешһен тип тырышабыҙ. Был йүнәлештә байтаҡ нәмә эшләнде лә инде, ләкин әле тағы ла күберәк эшләйһе бар", - тине ул.

Тантана айҡанлы ойошторолған байрам концерты программаһы ла бай булды. Унда Диләрә Иҙрисова, Рәдик Ефремов, Радик Юлъяҡшин, Гөлнара Ибракова, билдәле ҡурайсыбыҙ Роберт Юлдашев, "Заман" этно-проекты, "Аҡ тирмә" фольклор ансамбле, "Алтын Ай" бейеү коллективы һәм "Сулпан" башҡорт һылыуҙары студияһы сығыш яһаны. Кисәне Ассоциацияның иң әүҙем ағзаһы, тантаналы сараның режиссеры Фатима Янбаева менән билдәле тележурналист, сенатор Лилиә Ғүмәрованың ярҙамсыһы Марсель Вахитов алып барҙы. Сара башҡорт эстрадаһының билдәле йырсылары ҡатнашлығындағы йәштәр дискотекаһы менән тамамланды.

**Фаягөл ЮНЫСОВА.**

*АТЫҢ КЕМ?*

# БЕҘ - ӨС ТАҒАН...

**Хәҙер йәш башҡорт ғаиләләре балаларына сит-ят исемдәр ҡушыуға ҡарағанда, үҙебеҙсә матур яңғырашлы, мәғәнәле исемдәргә күберәк иғтибар итә. Шундай ғаиләләрҙең береһе Әбйәлил районы Оло Ғәбдин ауылында йәшәй.**



Альбина менән Айгиз Мәхмүтовтар береһенән-береһе шуҡ, итәғәтле өс сабый үҫтерә. Дүрт йәшлек өлкән ҡыҙҙары Айгүзәл, үҫкәс, сәхнәлә башҡорт бейеүсеһе булырға хыяллана. Олатаһы уға исемде әкиәттәге ай ҡыҙы кеүек һылыу, уңған булһын, тигән теләктә ҡушҡан икән. Ә бына Илгизәрҙең исемен өләсәһе яратып һайлаған. Малайҙың холоҡ-фиғеле төрөк теленән алынған "илдәр гиҙеүсе, сәйәхәтсе" тигән есемгә шул тиклем тап килгән, тиктормаҫ бала һәр яңы мөхитте тиҙ арала ҡыҙыҡһынып тикшереп сыға, уйынсыҡ атына атланып сабырға ярата. Айгүзәл менән Илгизәрҙе яңы ғына тәпәй баҫҡан ҡустылары Искәндәр ҙур терәк булып үҫмәксе. "Еңеүсе"не аңлатҡан исем йөрөткән малайҙың киләсәктә белгәненә көс, йөрәгенә шәфҡәт, бөйөк юлбашсылар аҡылы биреләүен теләй йәш ғаилә.

Балаларҙың исемдәренә һалынған мәғәнә тормошта үҙ юлдарын табырға ярҙам итһен, өс бер туған ғаиләһенең, халҡының, иленең ныҡлы өс тағаны булып үҫһен!

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ФАЙҘА МЕНӘН ЗАРАР...

## бер туғандар

Үткер бысаҡ, һимеҙ ат - табын күҙерен килтерер; яман ҡатын, ялҡау ат - әжәлдән элек үлтерер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йыш ҡына милләтте бер кеше ҡотҡара; йыш ҡына милләтте бер кеше харап итә.

**(П. Буаст).**

Әҙлелек Алла ҡулында саҡта ғына изге булып ҡала, ә кеше ҡулында ул мәйеттәрҙең ҡабатлау таблицаһына әйләнә.

**(М. Волошин).**

Теләктәр - тыныслыҡтың дошманы, ләкин теләктәрһеҙ сәнғәт тә, фән дә булмаҫ һәм һәр кем үҙ тиреҫе өҫтөндә ойор ине.

**(Анатоль Франс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йәшәгән. Уның йәшәйеше ниндәйҙер буталсыҡ ваҡиғалар, насар күренештәр менән тулы булған. Берҙән-бер көндө ул бындай йәшәү рәүешенән туйғанын аңлаған, аҡылға килергә, изге эштәр эшләргә, йәнен ҡотҡарырға кәрәк, тигән ҡарарға килгән. Шунан изге эштәр генә ҡыла башлаған. Әммә тормошонң яҡшы яҡҡа үҙгәреүен тоймаған.**

**Бер ваҡыт урамдан китеп барһа, бер әбейҙең пальтоһынан төймәһе өҙөлөп төшкәнен шәйләп ҡалған. Быны күргәс, ергә эйелергәмә-юҡмы, тип, байтаҡ баҫып торған был кеше. "Төймә лә булғанмы нәмә! Өйөндә бындай ғына төймәләре туп-тулылыр әле... Изгелек эшләйем, тип, шул юҡ нәмәне эйелеп алырға тейешменме икән мин?.." тип икеләнгән. Ә шулай ҙа төймәне эйелеп алған һәм баяғы әбейгә ҡыуып етеп, уға төймәһен тотторған. Шуның менән был ваҡиға онотолған.**

**Был кеше теге донъяға күскән. Күрә, уның алдына үлсәү ҡуйғандар һәм уның фани донъялағы яуызлыҡтарын һәм изгелектәрен үлсәйҙәр. Үлсәүҙең һул яғында ул ҡылған яуызлыҡтар ята, ә уң яғы буш. "Тимәк, яуызлыҡтарым күберәк булып сыға инде. Их, бында ла мин уңманым!" тип үкенгән кеше. Шул саҡ фәрештәләр үлсәүҙең уң яғына... бер төймә килтереп һала. Үлсәүҙең күрһәткесе ҡырҡа үҙгәрә. "Ошо бәләкәй генә төймә менән бәйле изгелек минең бар яуызлыҡтарымдан өҫтөрәк булып сыҡтымы ни былай булғас? Мин бит бик күп изге эштәр эшләнем, ни өсөн улар бында күренмәй?" тип аптырап торһа, фәрештәләрҙең һүҙҙәрен ишетеп ҡала: "Үҙеңдең изге эштәрең менән ғорурланып, һин уларҙы юҡҡа сығарҙың. Ә бына ошо төймә менән бәйле һин онотҡан изгелек һине тамуҡтан ҡотҡарҙы! Изгелек бит изге эштәрҙә түгел, ә изегелектең үҙендә - йөрәктә һаҡлана..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
20 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 1266